*Белем күңел күҙен аса, наҙанлыҡ, ҡараңғылыҡты бөтөрә, оло дәрәжәләргә тоташтыра, дошмандарға ҡаршы ҡорал була. Тормошто һаҡлай, донъя көтөү сәбәптәрен белдерә, йорт эсендә һәм, ғөмүмән, халыҡтар менән нисек булырға кәрәк икәнде өйрәтә. Урланыуынан ҡурҡылмаған мөлкәт - бөтмәй торған байлыҡ.*

**РИЗАИТДИН** нәсихәттәренән.


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

21-27 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2007 ЙЫЛ

№16 (226)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Европа кимәле юғарыраҡ,** шуға яҡынларға тырышыу кәрәк



4

**Шағирлыҡ-ул йәшен атыуы,** һунарсы коштоң ҡорбанына ташланыуы, балыҡ ҡарпыуы



8-9

**Боҙ китеү байрамы**



10

**Яралғы йәнен ҡыйып...** гонаһҡа бата гүзәл зат



12

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15


*Бөтөн байҙар кеүек, Бузыкайҙың ҡатыны ла ҡондоҙ бүрек, ебәк бишмәт кейеп йөрөй. Уға башҡорт старшиналарының барыһы ла бер модала кейенгән ҡатындары ярҙамлаша. Айырма күкрәксәләрендәге, елән итәктәрендәге тұктауһыҙ сылтырҙап, нумизматика коллекцияһын хәтерләткән таңкәләренең күләмендә генә.*

*Д.Н. Мамин-Сибиряк. "Өмә" хикәйәһе.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



Фәнил АБДУЛЛИН фотоһы

# Щепкинсылар ҡайтты!

## Бәхетле билет эләктергәйне улар бынан биш йыл элек

**Мәскәүҙәге М.С. Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһы Рәсәйҙең иң өлкән һәм абруйлы театр мәктәптәренән иҫәпләнә. Тап ошо уҡыу йортонда 2002 йылда Башҡортостан Хөкүмәтенең махсус ҡарарына ярашлы башҡорт труппаһы булдырылғайны. Ул ваҡытта республикабыҙҙың төрлө райондарынан йыйылған, башҡорт телен камил белгән өс йөҙҙән ашыу талантлы йәш кеше был уҡыу йортона инергә имтихандар бирҙе һәм араларынан 27 кеше был данлыҡлы уҡыу йортоноң студенты исемен йөрөтөргә лайыҡ тип табылғайны. Әле яңыраҡ, 16 апрелдә, бынан биш йыл элек Мәскәүгә юлланған башҡорт ҡыҙҙары һәм егеттәре тыуған Башҡортостанына, Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһенә әйләнеп ҡайтты. Ошо ваҡиға айканлы беҙ йәш артистарҙы уҡытҡан педагогтарҙың, Рәсәйҙең абруйлы театр тәнҡитселәренең фекерен белештек.**


**(Дауамы 16-сы биттә).**


ИҒТИБАР!

Икенсе ярты йыллыҡҡа гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. Тағы бер тапҡыр иҫкәртәбеҙ: гәзит-журналдарға яҙылыу яртышар йылға бүленеп үткәрелә башланы. Шуның өсөн, тотош йылға яҙылғанмын икән, тип яңылышып, икенсе ярты йыллыҡҡа гәзитһеҙ тороп ҡала күрмәгеҙ.

Шулай итеп, "Киске Өфө" гәзитен республиканың һәр ауылында, һәр ҡалаһында алдырып уҡып була: почталарҙа **50665** индекслы "Киске Өфө" гәзитенә ярты йылға яҙылыу хаҡы - **251 һум 64 тин** тәшкил итә.

АҢ БУЛ, КЕШЕ!

# Тағы ла ер тураһында,

## йәки Бөгөнгө көнөң иртәгәнден тәүге көнө икәнен онотма



**Граждандар тарафынан ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ер участкаларын түләүһеҙ хосусилаштырыу мәсьәләһе гәзит уҡыусыларында күп һорауҙар тыуҙыра. Улар телефон аша шылтыратып һорашалар, хаттар яҙалар. Ә Салауат районынан бер ағай редакцияға үҙе килде һәм беҙ уны Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты, Аграр, тәбиғи ресурстар, тәбиғәт байлыҡтарын файҙаланыу һәм экология мәсьәләләре буйынса комитет рәйесе Зифкәт Ислам улы СӘЙЕТҒӘЛИЕВ менән осраштырҙыҡ.**

Депутат һүҙен Тәтешле район гәзитен күрһәтеүҙән башланы. Баҡһаң, был райондың "Татышлинский вестник" гәзитендә ерҙе хосусилаштырыу мәсьәләһе асыҡтан-асыҡ яҡтыртыла икән. Бөтәһе лә күҙ алдында, имеш-мимештәргә, аңлашылмаусанлыҡтарға урын юҡ. Зифкәт Ислам улы йыраҡтан килгән мосафирға ер мәсьәләһен аңлайышлы итеп, ябай тел менән төшөндөрҙө. Уның аңлатмаһын һеҙҙең иғтибарығыҙға ла тәҡдим итәбеҙ.


**(Дауамы 5-се биттә).**

**✓ *Ҡала шарттарында үҙеңдең йөҙөңдө һаҡлап ҡалыр өсөн халҡыңа хас үҙ-үҙеңде тотоу нормаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе иҫкә төшөрөргә һәм иң мөһиме - телде оноторға ярамай.***

ИШАРА

# ҠАЙҘА АҠ, ҠАЙҘА ҠАРА?

## Ҡалаға килгән ауыл йәштәре ошо һорау сатында ҡала

**Беҙҙе ҡалала йәшәүсе ауыл йәштәренең йәшәйеше, рухи торошо бик борсой. Ҡала йәштәренең аҡыллы, тәртипле, уҡымышлылары бик күп. Араларында йүнһеҙҙәре, әшәке холоҡлолары ла байтаҡ. Ана шундайҙарға эйәрә лә инде ҡайһы бер ауыл йәштәре. Сөнки тормош тәжрибәһе етешмәгәнлектән, улар ҡалаға килгәндә аҡты ҡаранан айырыр хәлдә булмай. Ауылдан сығып китеп, ҡала ерлегенә килеп эләккән йәштәргә тәү сиратта кәңәш, иғтибар кәрәк. Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, психология фәндәре докторы, профессор, Башҡорт дәүләт педагогия университетының психодидактика лабораторияһы етәксеһе, Рәсәйҙәге тәүге "Нравология" исемле хеҙмәт авторы Әхмәт Зәки улы РӘХИМОВ менән әңгәмәбеҙ ҡалаға күсеп килеүсе ауыл йәштәре тураһында.**

### Ҡалала ни көтә?

Элек-электән ауыл йәштәре ҡаланыҡыларға ҡарағанда күпкә әхлаҡлерәк, рух яғынан нығыраҡ һанала ине. Сөнки ҡала шарттарында күңел сафлығын һаҡлауы барыбер бик ауыр. Ауылда иһә әхлаҡ ҡиммәттәре быуындан-быуынға тапшырылып, һаман өҫтөнлөк итә килә. Әлбиттә, бөгөнгө ауылдың әхлаҡи йөҙө элекке менән сағыштырырлыҡ түгел. Ауылдан сығып киткән балалар, ҡалаға йәшәргә килгәс, ҡаласа күренештәр, йәшәү рәүеше алдында баҙап ҡала. Баҙай һәм... әле яманды яҡшынан айырырға өйрәнеп өлгөрмәгән, быуыны ҡатмаған йәш-елкенсәк ҡала тормошон вульгар рәүештә үҙләштерергә тотона: шешәһенән үк һыраны урамда һемереү, тәмәке, наркотиктар ҡулланыу, аҙғынлыҡ, тәртипһеҙ енси бәйләнештәр... Башҡалар шулай йәшәй икән, мин дә шулай уҡ йәшәйәсәкмен, тип уйлай бер ҡатлы ауыл балаһы. Ата-әсәнең вайымһыҙлығына ла аптырамай булмай: баланды ҡалаға уҡырға ебәр ҙә, унын артабанғы тормошон күҙ уңынан ысҡындыр, имеш. Ҡала балалары иһә насар күренештәргә бирешә һалып бармай. Сөнки нимә насар, ә нимә яҡшы икәнлеген ул биләүҙән үк тоя башлай.

Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙҙың тәмәке тартыуы кеүек насар күренеште алып ҡарайыҡ. Ситтән ҡарап торһаң, унан да имәнесерәк күренеш юҡтыр ул донъяла. Тәмәке тартҡан ҡатын-ҡыҙҙың егерме биш проценты һуңынан бала табырға һәләтһеҙ булып сыға, тип белдерә ғалимдар. Йәки ундай ҡатындарҙан тыуған ир балалар нәҫелен дауам иттерә алмай. Шулай итеп, әхләк мәсьәләһе демографик проблема тыуҙыра.

### Әхләк нигеҙе нимәлә?

Ҡалаға тәүләп аяҡ баҫҡан йәш кеше урбанизация процесы йоғонтоһона бирелә һәм ҡалала аноним, йәғни сит кеше булып китә. Уларҙы берәү ҙә белмәй, бер кемгә лә кәрәк түгелдәр. Ауылда иһә хәл башҡасараҡ. Унда быуындар бәйләнеше лә күпкә нығыраҡ бит. Шуға күрә ауылда ғөрөф-ғәҙәттәр һаҡланып килә әле. Иң мөһиме, ауылда ояла беләләр. Боронғо Ҡытай ғалимы Лаоцзы: "Оятын юғалтҡан кеше - кеше түгел", - тигән. Хәҡиҡәт бына нимәлә: оялыу хисе кешене хайуандар донъяһынан айыра. Ҡалаға килгән йәштәр ҡалаға хас норманы йәһәтләп үҙләштерергә тотона һәм оялыу хисен юғалта. Ни өсөн? Сөнки ниндәйҙер әхләҡи вакуумда йәшәгән кеше ҡапыл унан азат булһа, рух үҙәге нигеҙен юғалтып, ҡаҡшай башлай.

Ояла белеүҙе һәм намыҫлы булыуҙы Ислам дине лә талап итә. Әммә ҡасандыр диненән көсләп айырылған халыҡ үҙен насар йоғонтонан һаҡлап ҡала алмай. Бәлки, шуғалыр ҙа, коммунизм дәүере тамамланғас, диненән һәм рухынан яҙған халыҡ ҡалала ла, ауылда ла эскегә, әхләҡһеҙлеккә батҡандыр? Күңелдә дин тәғлимәттәре, борондан килгән тәртип-йолалар юҡ икән, уларҙың урынын насар күренештәр тултыра алмаймы ни?

### Ҡала йоғонтоһо йоға

Беҙҙең йәмғиәттең тәрбиә торошо иһә иң түбән кимәлдә. Ни өсөн? Беҙҙә быуындар бәйләнеше өҙөлөп ҡалды. Быуаттар буйына һаҡланып, быуындан-быуынға тапшырылып килгән халыҡ аҡылы, халыҡ педагогикаһы елгә осто. Үҙтәрбиә ҡанундарынан яҙған халыҡ ситтәрҙең аҡылы менән йәшәй башланы. Элекке заманда тәрбиәне ғаиләлә һәм мәсеттәрҙә, сиркәүҙәрҙә алғандар. Дин йорттарының төп эше лә йәштәргә әхләҡи тәрбиә биреү бит. Совет заманында рухи ҡиблаһынан яҙған халыҡ хатта милли йөҙөнән яҙыр сиккә еткерелде.

Аристотелдең һүҙҙәрен иҫкә төшөрәм: "Әгәр ҙә беҙҙең йәмғиәт фән яғынан алға китеп, әхлаҡ яғынан ҡаҡшау кисерә икән, беҙ алға түгел, артҡа атлайбыҙ". Әлбиттә, республикала әхлаҡи тәрбиә биреү йәһәтенән эштәр башҡарыла. Хатта республикабыҙ Президенты М. Рәхимов 2006 йылдың 26 сентябрендә "Йәш быуынға әхлаҡи тәрбиә биреү тураһында" махсус Указ сығарҙы. Был матур башланғыс ябай сараларға ғына, йә мәктәптәргә генә ҡайтарып ҡалдырылмаһын ине. Ябай халыҡ үҙе лә әхлаҡ хаҡында ныҡлап уйлана башлаһа, яҡшы булыр, тигән фекерҙәмен. Яҡшылыҡты ҡабул итер өсөн дә рух әҙерлеге кәрәк бит.

### Ҡала кешеһе кем?

Ҡала кешеһе булып китеүе бик ауыр. Кем ул ҡала кешеһе? Ул - интеллектуаль, профессиональ яҡтан бик юғары, үҙенсәлекле, айырылып торған стилдә кейенеүсе, иркен, ләкин бик һаҡ аралашыусы шәхес. Көнөнә әллә күпме кеше менән аралашһа ла, ысынында ул яңғыҙ - ул бит кем менән аралашҡанын белмәй. Шуға күрә күңелен аса һалып бармай. Унын нәмә уйлағанын, ни кисергәнен берәү ҙә һорамай, сөнки һәр кем үҙ хәстәре менән йәшәй. Урамда йөрәгең туктап, ҡолап ят - бер кеше лә яҡын килеп, ярҙам итмәйәсәк. Сөнки беҙ һөйләгән мөхит өсөн ярҙам итеү, кешелеклелек күрһәтеү кеүек сифаттар ят әйбер. Ауылда иһә һәр кем бер-береһен белә, ярҙам итә. Таныу, үҙеңде йәмғиәт кешеһе итеп ҡабул итеү етешмәй мегаполиста. Ҡала кешеһе булып китер өсөн мегаполиста йәшәүсе быуын дүрт тапҡыр алмашынырға тейеш. Шул ваҡытта ул быуындың ауыл менталитеты яйлап юҡҡа сыға. Ауыл кешеләренә килгәндә, улар үтә ябай, ярҙамсыл, ихлас, хатта бер ҡатлы. Ҡалала йәшәүсе кешеләр ярты-шар быуат буйы бер стена аша йәшәп тә, бер-береһен белмәй. Шуға күрә, ҡала кешеһе бер кемдән дә ҡурҡмай, оялмай һәм яуаплылыҡ тоймай.

### Ауыл ниндәй роль уйнай?

Ҡалала кеше профессиональ яҡтан үҫешһә, ауыл - интеллектуаль потенциал башланғысы. Бөтә билдәле, талантлы кешеләр тиерлек ауылда тыуған. Президент аппаратында эшләүсе кешеләрҙең - йөҙ, республика предприятиелары етәкселәренең туҡһан проценты сығышы менән ауылдан икәнлеген беләһегеҙме һеҙ? Ижад кешеләре лә тулыһынса тиерлек ауыл ерлегенән. Йәғни, улар барыһы ла ауыл мөхитендә тәрбиәләнгән, дөйөм халыҡҡа хас үҙенсәлектәргә эйә кешеләр. Ҡалған ун процентты тәшкил итеүсе кешеләр кисә ауыл һаналып, бөгөн генә ҡалаға әүерелгән ерҙә тыуып үҫкәндәр. Был хәл Башҡортостан өсөн генә түгел, бөтә Рәсәй өсөн хас.

Тағы бер ҡыҙыҡлы факт. Юғары потенциалға эйә кешеләр сығышы менән таулы ерҙән. Был мәсьәлә менән геопсихология фәне шөғөлләнә. Ул шул ергә хас ландшафттың, һауа торошононң, тәбиғәттең кеше психикаһына ҡарата булған йоғонтоһон өйрәнә. Кавказ, Алтай йәки Урал тауҙары янында йәшәүсе халыҡ иҫ киткес юғары аҡыл һәләтенә эйә, тип иҫәпләй геопсихологтар.

Беҙгә милләтебеҙгә хас үҙенсәлектәребеҙҙе яңынан тергеҙергә кәрәк. Юғиһә, беҙҙең барыбыҙға ла маңҡортлоҡ бәләһе янай. Коммунистар дәүерендә алған тәрбиә милли йөҙөбөҙҙө юйыр өсөн барыһын да эшләне. Ул йоғонто һаман үҙен һиҙҙертә һәм тиҙ генә юҡҡа сыҡмаҫ әле. СССР ваҡытында йыш ҡына психологтар съездары үткәрелә торғайны. Унда этнопсихология мәсьәләләре буйынса секция бөтөнләй булманы. Хатта быңдай фән юҡ ине. Йәнәһе лә, халыҡ бар, ә халыҡтың милли үҙенсәлектәренә ҡағылған мәсьәләләр юҡ.

### Үҙеңде нисек һаҡларға?

Ҡала шарттарында үҙеңдең йөҙөңдө һаҡлап ҡалыр өсөн, халҡыңа хас үҙ-үҙеңде тотоу нормаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе иҫкә төшөрөргә һәм иң мөһиме - телде онотторға ярамай. Тел бөгөнгө көн менән киләсәкте, үткәндәрҙе бәйләп тора бит. Маңҡорттар үҙҙәре хәҙер тотош бер милләтте тәшкил итә: телһеҙ, киләсәкһеҙ, үткәнһеҙ. Ауыл йәштәре ошо яман күренештән һаҡланһын ине. Атай-әсәйҙәрегеҙ һеҙҙе ҡалаға килеп, маргинал булһын өсөн үҫтермәгән бит. Телде лә, милләтте лә, унын үҙенсәлектәрен дә әхләҡ ярҙамында һаҡлап ҡалып була. Шуға күрә, иң мөһиме, йәштәрҙе әхләҡи тәрбиәнән мәхрүм итергә ярамай.

**Ләйсән МАРАҠАНОВА яҙып алды.**

> ***Тағы бер ҡыҙыҡлы факт. Юғары потенциалға эйә кешеләр сығышы менән таулы ерҙән. Был мәсьәлә менән геопсихология фәне шөғөлләнә. Ул шул ергә хас ландшафттың, һауа торошононң, тәбиғәттең кеше психикаһына ҡарата булған йоғонтоһон өйрәнә. Кавказ, Алтай йәки Урал тауҙары янында йәшәүсе халыҡ иҫ киткес юғары аҡыл һәләтенә эйә, тип иҫәплөй геопсихологтар.***

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бөгөнгө көндә Мәскәүҙә Әхмәт Зәки улының уҡыусыһы ЧЕРНЫЙ Александр Григорьевич тарафынан "Әхлаҡи үҫеш Академияһы" тип исемләнгән ойошма асылған. Был ойошма бөтә Рәсәй территорияһында урынлашҡан мәктәптәрҙә һәм башҡа уҡыу йорттарында әхлаҡи тәрбиә биреү юҫығында эш алып барасаҡ. Тимәк, әхлаҡ мәсьәләһе ил күләмендә хәл ителә. Хөкүмәт шул юҫыҡта төрлө ҡарарҙар сығарыр, төрлө ойошмалар асыр, ләкин халыҡ үҙе лә был тәрбиәне ҡабул итергә әҙер булырға тейеш. Шунһыҙ бер нәмәнең дә һөҙөмтәһе булмаҫ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Республика йортонда БР Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов менән "СИБУР Холдинг" асыҡ акционерҙар йәмғиәте президенты Дмитрий Конов, "ЛУКОЙЛ" йәмғиәте вице-президенты, "ЛУКОЙЛ-Нефтехим" ябыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Алексей Смирнов һәм "Селена" заводы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең генераль директоры Владимир Канибер "ПОЛИЭФ" полиэфир комплексын үҫтереү тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Унда БР Президенты Мортаза Рәхимов, "ЛУКОЙЛ" йәмғиәте президенты Вагит Алекперов, "СИБУР Холдинг" йәмғиәтенең директорҙар советы рәйесе Александр Дюков һәм башҡа рәсми кешеләр ҡатнашты.

✓ "Башҡортостан Республикаһының иң төҙөк ҡалаһы" конкурсының 2006 йылғы йомғаҡтары буйынса 60 меңдән ашыу халҡы булған ҡалалар араһынан Стәрлетамаҡ еңеүсе тип танылды. Икенсе урынды Октябрьский, өсөнсөнө Нефтекама ҡалалары яуланы. 60 меңдән аҙыраҡ халыҡ йәшәгән ҡалаларҙан иң яҡшы өсәү рәтенә Дүртөйлә, Яңауыл һәм Учалы индерелде. "Иң төҙөк район үҙәге" номинацияһында Иглин, Толбазы, Саҡмағош, Ермолаево, Йәрмәкәй, Федоровка ауылдары еңде.

✓ Башҡорт дәүләт аграр университетының "Ер ҡоролошо һәм урман хужалығы" факультетында быйыл тағы ла өс - "Баҡса-парк һәм ландшафт төҙөлөшө", "Ер кадастры", "Ҡала кадастры" һөнәрҙәренә уҡыуға ҡабул итәсәктәр.

✓ 1989-1990 йылғы үҫмерҙәр араһында хоккей буйынса Владислав Третьяк кубогына Бөтә Рәсәй ярыштары булып үтте. Төп призды "Салауат Юлаев" хоккей командаһы яуланы.

✓ Быйыл йыл башынан республикала 11 меңдән ашыу бала тыуған. Уларҙың 4900-ө ғаиләлә икенсе һәм артабанғы балалар. Йыл башынан әсәлек капиталы алыуға 2778 кеше ғариза биргән, уларҙың 1852-һе 250 мең һумлыҡ сертификатты ҡулына алған да инде.

✓ "Һылыуҡай - 2007" бәйгеһендә Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының XI синыф уҡыусыһы Таңсулпан Сиражетдинова Гран-при яуланы.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# НЫҠ ТОР, ҺАЛДАТ!

## Тереләрҙең ҡәҙерен белһәң...

**Һәйкәлдәрҙе балалар һымаҡ күреп китәм ҡай саҡ. Ҡалаларыбыҙ, ауылдарыбыҙ урамдарында, майҙандарҙа бейек постаменттарҙа һерәйешеп торһалар ҙа, үҙҙәрен яҡлай алмай шул улар. Хатта бронзанан йәки таштан булһалар ҙа. Хатта ҡулдарына автомат тотоп торһалар ҙа. Йәмғиәттең сәләмәтлеген уның ҡарттарға һәм балаларға мөнәсәбәтенән белеп була, тиҙәр. Хәйер ошо уҡ һүҙҙәрҙе дәүләткә ҡарата ла әйтеп булалыр ул. Мин ошо исемлеккә һәйкәлдәрҙе лә өҫтәр инем. Улар ҙа бит сабыйҙар, йәки пенсионерҙар кеүек йә ҡарауһыҙ, йә яҡлауһыҙ. Кем телəй, шул йәберләй, кәмһетә.**

Һүҙем бөгөн һәйкәлдәр тураһында. Фәҡүмән, нимәгә кәрәк улар, тигән һорау тыуа ҡапыл ғына. Миненсә, һәйкәлдәр кеше хәтеренең ҡыҫҡа булыуын сағылдыра. Уйлап ҡараһаң, бөгөн, мәҫәлән, Владимир Ильич Лениндың һәр бер ҡалала һәм ауылда ҡуйылған күп һанлы һәйкәлдәре һәм бюстары, уның кем булғанын, илебеҙ тарихында ниндәй урын биләгәнен иҫкә төшөрөп тормаһа, беҙ быны (айырыуса, йәш быуын) ҡайҙан белер инек? Ошо урында Буранбайҙың бер шиғыры иҫкә төшә:

*"Баймаҡ ҡалаһының
уртаһында,
һәйкәл тора В.И.Ленинға,
һәйкәл һәйкәл инде,
художниктар
ҡуйып киткән уны 100 меңгә.
Шул һәйкәлгә ҡарап үткән
һайын,
Бер генә уй мине тетрәтә:
Нишләп Ленин райсоветка
битен,
Ә халыкка артын күрһәтә?
Иркен илем! Күпме тағын
һиндә
эреле-ваҡлы Ленин һәйкәле.
Шулар өсөн күпме цемент,
тимер,
Буяу киткәнлеген әйт әле".*

Ленин һәйкәле, Ленин исемендәге урам булмаған ҡала юҡтыр бөгөн Рәсәйҙә. Ҡайһы бер төбәктәрҙә 1991 йылдан һуң тәүгеләренән дә, икенселәренән дә тиҙ арала арындылар. Урам исемһеҙ булмаған кеүек, майҙан да һәйкәлһеҙ буш тора алмай бит инде. В.И. Ленин урынына икенселәрҙең сәйәси моментҡа тап килгәндәрҙең һәйкәлдәре баҫты. Беҙҙә генә, Өфөлә тиеүем, һәйкәлдәргә иғтибар кәмемәй. Никахҡа инеүселәр аҙна һайын йома еткә, В.И.Ленинға сәскәләр һала, һәйкәл эргәһендә фотоға төшә. Яҙ еткә, берәй сәйәси партия Ленинды таҙалап йыуа. (Был юлы был эште коммунистарҙан алда "Берҙәм Рәсәй" вәкилдәре башҡарып өлгөрҙө инде).

Хәйер, һүҙем Ленин һәйкәлдәре хаҡында түгел. Улары торһон. Илебеҙҙең ҡанлы-шанлы тарихын халыктың иҫенә төшөрөп булһа ла.

Инде бер йыл буйына икенсе бер һәйкәл тирәләй ҡаңғырыҡ тынмай. Беҙҙең бөгөнгө илебеҙҙә урынлашмаған ул монумент. Кисәге дәүләтебеҙҙең бер остоғонда. Бөгөн үҙ аллы ил булған, үҙ президенты һәм парламенты, армияһы һәм валютаһы, гимны һәм гербы, граждандары һәм "неграждандары", дәүләт теле булған Эстонияла 2006 йылдан бирле бер һәйкәлде алып ташлай алмайҙар. Эстонияла бер йыл элек булған ваҡиғалар хаҡында яҙыуҙың ни мәғәнәһе бар тиерһегеҙ. Яңылышаһыҡ, йәмәғәт! Ул һәйкәл туранан-тура беҙгә ҡағыла. Илебеҙҙең данлы тарих биттәренең береһен юҡҡа сығарыуға йүнәлтелгән был эш. Беҙгә тиеүем, Рәсәй йәки урыҫ халкын ғына аңлатмай. СССР-ҙа бит урыҫтар һәм башҡорттарҙан тыш тағы ла әллә күпме милләт йәшәне - грузиндар һәм әрмәндәр, украиндар һәм белорустар, әзербайжандар һәм молдовандар, ҡаҙаҡтар, ҡырғыҙҙар, үзбәктәр һәм төркмәндәр, латыштар һәм литвалар... һәм, әлбиттә, эстондар. Төрлө милләт вәкилдәре өсөн ҙур бер йорт булды. Әйе, ҡайһы берәүҙәр уны "халыктар төрмәһе" тип тә атаны. Әммә дошман шул "төрмә"не юк итергә ынтылғанда, ошо халыктар үҙҙәренең "йорт"он яҡлап яуға сыкты, амбразураларға ташланды, атакаға күтәрелде, ҡылыс менән фашист танкыларына ҡаршы сыкты. Ниһайәт, оло юғалтыуҙар менән рейхстагтың түбәһенә ҡыҙыл әләм беркетеп ҡуйҙы. Оло алыш тамамланыуына алтмыш йылдан ашыу ваҡыт үтһә лә, һуғыш яландарынан иҫән ҡайтыусыларҙың ул сакта алынған яралары һаман һыҙлай, улар һаман ҡулдарына граната бәйләмдәрен тотоп, дошманға ҡаршы йүгергәндәрен төштәрендә күрә. Ә яу ҡырҙарында ғүмерҙәре ҡыйылған һалдаттарҙың йәндәре һаман тыныслаңыр урын тапмай аптырана. Берәүҙәренең тәндәре 60 йылдан һуң да христианса йәки мосолманса ерләнмәй һуғыш үткән урындарҙа туҙып ята. Ә икенселәргә иһә тереләр тыңғы бирмәй...

Эстонияның баш ҡалаһы Таллинда Тынис Мяги майҙаны бар. Унда 1944 йылдың сентябрендә Эстонияны немец-фашист ғәскәрҙәренән азат иткәндә һәләк булған 13 һалдат ерләнгән. Шунда уҡ Азатлыҡ һалдатына бронзанан һәйкәл ҡуйылған. Ошо һәйкәл һәм уның эргәһендәге ҡәберҙәр тыңғы бирмәй эстондарға. Тәүҙә Азатлыҡ һалдатын алып ташлау буйынса эшмәкәрлеккә эстон милләтселәре башлап ебәргәйне. Бер йыл элек 9 май байрамы алдынан улар "Эстон, арҡаңды турайт!", "Ҡыҙыл оккупантты алып ташлайыҡ!" тигән лозунгылар күтәреп майҙанға сыкты һәм һәйкәлде колатырға маташты. Әйткәндәй, Эстон милли хәрәкәтенең башлығы Тиит Мадиссон 2004 йылда уҡ үҙенең хуторында 20-се эстон СС дивизияһы һалдаттарына һәйкәл ҡуйыуҙы хуплаған һәм быға бар көсөн һалған кешеләрҙең береһе булараҡ билдәле. Һуңынан иһә был эшкә Эстонияның етәкселеге - парламенты, хөкүмәте һәм президенты килеп ҡушылды. Парламент депутаттары тиҙ арала "Хәрби зыяраттарҙы һаҡлау" тураһында махсус закон ҡабул итте. Ә премьер-министр Бронза һалдатка һәм уның эргәһендә ерләнгәндәргә Таллинн ҡалаһы ситендә урын әҙерләп ҡуйылыуы тураһында хәбәр итте. Бронза һалдат һәйкәле Эстонияла йәшәгәндәр өсөн генә түгел, Рәсәй халкы өсөн дә үҙенсәлекле бер символға әүерелде. Эстондар был һәйкәлде "Совет оккупацияһы билдәләренең береһе", тип ҡабул итһә, рәсәйлеләр иһә уны алып ташларға йәки күсерергә тырышыуҙы "Бөйөк Ватан һуғышы һөҙөмтәләрен ҡабаттан ҡарау һәм үҙгәртергә маташыу", тип аңланы. Ә ҡайһы бер сәйәсмәндәр иһә уңайлы ваҡыт менән файҙаланып, халыҡ алдында үҙ рейтингын күтәрергә ынтылды. Мәҫәлән, элекке оборона министры, ә бөгөн Рәсәй Хөкүмәте рәйесенең беренсе урынбаҫары булған, киләсәктә иһә илебеҙҙең иң юғары посына дәғүәселәрҙең береһе һаналған Сергей Иванов. Ул хатта Эстония тауарҙарын һатып алмаҫҡа, тип бойкот иғлан итергә саҡырғайны.

Тәүҙә эстондарҙы аңларға тырышып ҡарайыҡ. Улар өсөн элекке Советтар Союзы - Эстонияны баҫып алған һәм коммунистик идеяларҙы һеңдерергә тырышҡан дәүләт. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң Совет власы урынлаштырылған осорҙа меңәрләгән эстон халҡы ғаиләһе, балалары менән Себергә оҙатылғанын, ә эстон партизандарының урмандарҙа йәшеренеп, 50-се йылдарға тиклем Ҡыҙыл Армияға ҡаршы һуғышҡанын улар онотмай. Улар фашистик Германияның ғәскәрҙәрен Сталин каторгаһынан азат итеүсе, тип ҡабул итә. Шуға ла баш ҡаланың уртаһында һерәйеп торған Бронза һалдатты алыҫҡараҡ йәшерергә тырышыу - эстондар өсөн тарихи дөрөҫлөктө тергеҙеү генә.

Рәсәй өсөн иһә был һәйкәл Бөйөк Еңеүҙе сағылдыра. Бөгөн беҙҙең илдә һәр бер ғаиләлә аталары булмаһа, картаталары, башка туғандары шул һуғышта ҡатнашҡан, яралар алған йәки һәләк булған. Беҙҙең өсөн ул мәл, ысынлап та, азатлыҡ һуғышы һәм беҙ уны башкаса ҡабул итә алмайбыҙ. Ә совет һалдаттары иҫтәлегенә ҡуйылған һәйкәлдәрҙе емерергә маташыу - ул беҙҙең өсөн асыҡ яраға тоҙ һибеү менән бер. Бөгөн Бөйөк Ватан һуғышы осоронда яу ҡырҙарында ятып ҡалыусыларҙың ҡәберҙәре бөтә Европа буйлап һибелгән. Германия һәм Польша, Венгрия һәм Чехия, Словакия һәм элекке Югославия илдәре, Румыния һәм Австрия... Хатта Францияла, Грецияла һәм Италияла совет һалдаттары хөрмәтенә монументтар ҡуйылған. Уларға әлегә берәү ҙә йоғонмай. Берәү ҙә емерергә маташмай. Ә айырым неонацистик ойошмаларҙың әйтеп үтелгән зыяраттарҙы мәсхәрәләүҙәре лә яуапһыҙ ҡалмай.

Мине икенсе бер нәмә борсой һәм аптырата - Бөйөк Ватан һуғышында урыҫтар һәм бөгөн Рәсәй территорияһында йәшәгән башка халыҡ вәкилдәре генә түгел, хәҙер үҙаллы дәүләттәрҙә йәшәгән грузин һәм әрмән, ҡаҙаҡ һәм ҡырғыҙ һ.б. халыҡтары ла ҡатнашты бит. Әллә уларға бөгөн ул һуғыш һәм ул Еңеү кәрәкмәйме? Әллә уларҙың ата-бабалары Польша һәм Германия, Чехословакия һәм Венгрия ерҙәрендә ятып ҡалмағанмы? Әллә ошо халыҡтарҙа Советтар Союзын күрә алмау тойғоһо шул тиклем көслөмө? Һәйкәлдәр бары тик цемент һәм тимер, бронза һәм таш ҡына. Скульпторҙың оҫталығы һәм кеше хәтере һәйкәлдәрҙән теге йәки был дәүерҙең символын яһай. Уларҙы емереү бер ни ҙә тормай.

**Хәтерләйһегеҙҙер, 1991 йылдың көҙөндә Мәскәүҙә Лубянка майҙанында Феликс Эдмундович Дзержинскийҙың һәйкәлен емерҙеләр. Унан һуң төрлө ҡалаларҙа төрлө шәхестәргә ҡуйылған монументтар юҡҡа сығарылды. Ә чечен халҡы бөгөн Никита Сергеевич Хрущевка һәйкәл ҡуйырға йыйына. 50-60-сы йылдарҙа чечен халкын реабилитациялау буйынса күп көс һалғаны өсөн. Эстондарға ғына түгел башҡаларға ла мөрәжәғәт итке килә - емереү аңһат ул, онотор, онотторор өсөн күп көс һалырға кәрәкмәй, кабаттан тергеҙеүе, ай-һай, ҡыйынға тура килмәгәйе? Һүҙем һәйкәлдәр хаҡында ғына булманы, шикелле.**

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Закон буйынса 2009 йылдан уҡыу планының региональ компонентына ингән предметтарҙан да Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыу ҡаралған. Шуға ла республикала башҡорт теленән тестар әҙерләүсе комиссия төҙөлгәйне. Комиссия эшенең һөҙөмтәһен тикшереү өсөн, Әбйәлил, Асҡын, Стәрлетамаҡ райондарында һәм 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатында һәм Республика башҡорт лицейында башҡорт теленән һынау БДИ-һы үткәрелде.

✔Ейәнсура районының Иҫәнғол ауылында кисә Ейәнсура, Хәйбулла, Йылайыр райондарында, Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ райондарында, Һамар өлкәһендә йәшәгән үҫәргән ырыуы вәкилдәре ҡорға йыйылды.

✔М. Акмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында башҡорт психология мәктәбенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе профессор Вадим Сафиндың эшмәкәрлеген яҡтыртҡан стенд асылды. Күргәҙмәлә Ейәнсура районынан сыҡкан ғалимдың фәнни эшмәкәрлеге, ғилми хеҙмәттәре, монографиялары урын алған.

✔Башҡортостан Республикаһы Ҡатын-ҡыҙҙар союзы үҙенең 20 йыллығын билдәләне. Ошо юбилей айканлы үткәрелгән тантаналы йыйылышҡа килеүселәргә Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов ҡотлау телеграммаһы ебәрҙе.

✔БР Хөкүмәте Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов "Ағиҙел" Олимпиадаға әҙерләк үҙәгендә велоспорт буйынса Олимпиада резервындағы мәктәп филиалдарына ун бер махсус автобус тапшырҙы. "Ағиҙел" велоүҙәге 4 донъя чемпионы, донъя чемпионатында 6 призер, 41 Рәсәй чемпионы һәм Рәсәй чемпионатында 10 призер, Донъя кубогында 4 еңеүсе тәрбиәләп сығарҙы.

✔Баймактар "Хаталарҙы бергәләп төҙәтәйек!" тигән акция ойошторҙо. Баймаҡ район хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика бүлеге һәм "Башҡортостан халыктары телдәре тураһында"ғы Законды ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссия ойошторған был акцияла ҡала һәм район биләмәһендәге тышҡы реклама, төрлө атамалар, алтҡаталарҙағы, штамп, бланктарҙағы башҡортса яҙыуҙарҙа хата тапкан һәр кем ҡатнаша һәм бүләк ота ала.

✓ *Кредитҡа фатир алыу мөмкинлеге тураһында ҡала халҡы күпкә мәғлүмәтле булһа, был хаҡта ауыл ерендә йәшәүселәрҙең 22-24 проценты ғына хәбәрҙар.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# Ипотека ылыҡтыра ла ул...

**✦ Ипотека - фатир алыу ысулы булараҡ ҡыҙыҡлы, ләкин Рәсәйҙең байтаҡ кешеләре өсөн әлегә ул буй етмәҫлек вариант. Был хаҡта Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү һәм Финанс тикшеренеүҙәр милли үҙәктәренең Рәсәйҙең 46 төбәгендәге 153 ҡасабала йәшәүсе кешеләргә биргән һорауҙарҙан алынған яуаптар раҫлай.**

Яуаптар һөҙөмтәһе рәсәйҙәрҙең байтағы өсөн торлаҡ иң актуаль мәсьәлә булыуын раҫлай. Халыҡтың 56 проценты, торлағымды яҡшыртыр инем, тиһә, 21 проценты фатирға айырыуса мохтаж. Өфө кеүек ҙур ҡалалар өсөн торлаҡ мәсьәләһе бигерәк тә актуаль булып ҡала.

Ипотеканың нимә икәнен рәсәйҙәрҙең 35 проценты яҡшы аңлай. Һорау алыу үткәргәндә яуап биреүселәрҙең 44 проценты был хаҡта яҙа-йоҙа ғына ишетеүен белдерһә, 17 проценты ипотека кредиты тураһында бер нимә лә белмәй булып сыға.

Кредитҡа фатир алыу мөмкинлеге тураһында ҡала халҡы күпкә мәғлүмәтле булһа, был хаҡта ауыл ерендә йәшәүселәрҙең 22-24 проценты ғына хәбәрҙар. Ил халҡының 1 проценты ғына ипотека менән файҙаланһа, 17 проценты кредит алырға йыйына һәм уларҙың 4 проценты яҡын көндәрҙә үк кредит юлларға уйлай. 72 процент кеше кредит менән файҙаланмау яғында. Уға килемдең юғары булмауы (36 проц.), процент ставкаһының юғарылығы (32 проц.), килем тотороҡлоғо ышаныслыһыҙлығы (23 проц.), күсмәй торған милеккә хаҡтарҙың етеҙ үҫеүе (15 проц.) төп сәбәп булып тора.

Былтыр Башҡортостанда торлаҡ алыуға кредит 10,7 миллиард һумдан да күберәк бирелгән. Ул 2005 йыл менән сағыштырғанда өс тапҡырға күберәк. Өфө ҡала Ипотека кредиты агентлығының генераль директоры Анатолий Мейзлерҙың әйтеүе буйынса, быйыл күсмәй торған милеккә хаҡтың юғары булыуы арҡаһында кредит биреү күләме ҡырҡа ҡыҫҡарыуы бар.

# Гепатитҡа ҡаршы көрәш

**✦ В гепатиты - Рәсәй табиптарын борсоуға һалған иң яман ауырыу. Медиктар әйтеүенсә, йәштәр араһындағы енси тәртипһеҙлек был инфекцияны быуат ауырыуына әүерелдереүе мөмкин.**

Табиптар был вирусты вакцина ярҙамында үлтереп - В гепатитына ҡаршы һуғыш асты. Прививканы тәү сиратта 18-ҙән 35 йәшкә тиклемге йәштәргә яһай башланылар. Быйыл поликлиникаларға вакцина артығы менән алыныуға ҡарамаҫтан, йәштәрҙе прививка яһатырға ҡыуып тигәндәй килтерәләр. Табиптар өй беренсә йөрөп укол яһарға мәжбүр булды. Йәштәрҙең береһен дә ҡалдырмай вакцинациялау "Сәләмәтлек" милли проект сиктәрендә үткәрелә.

В гепатиты тәү сиратта кешенең бауырын зарарлау сәбәпле, бауырҙың организмды таҙартыу эшмәкәрлеге туҡтай. Былтыр прививка 1 мең һум тора ине. Быйыл ул түләүһеҙ, сөнки был сир менән зарарланыусылар бигерәк күп. Алты ай эсендә бөтәһе өс кенә укол яһатырға кәрәк һәм гепатиттың ни икәнен дә белмәйәсәкһең.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# Европа кимәле юғарыраҡ,

## шуға яҡынларға тырышыу кәрәк



**РФ Хөкүмәте юғары белем биреүҙең Европа кимәлендәге яңы системаһына күсеү тураһындағы Закон проектын хупланы. 2007 йылдың 1 сентябренән вуздарҙа ике баҫҡыслы система буйынса уҡытыу башланасаҡ. Беренсеһе - бакалавриат, икенсеһе - магистратура. Әммә был яңылыҡ бөтә вуздарға ла ҡағылмай. Медицина, хәрби һәм техник юғары уҡыу йорттары традицион структурала ҡаласаҡ. Был яңылыҡ ниҙән ғибәрәт, уның әһәмиәте нимәлә? Ошо һорауға яуап алыу ниәтендә М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры, педагогика фәндәре докторы, профессор Раил ӘСӘҘУЛЛИНға мөрәжәғәт иттек.**

- Рәсәй юғары белем биреү системаһы беҙҙә һәр ваҡыт бер баҫҡыслы булды, - тине Раил Мирвай улы. - Тормош алға барған һайын, иҡтисад та, белгестәр әҙерләүгә талаптар ҙа үҙгәрҙе. Юғары уҡыу йортонда уҡып сыҡтың да, ғүмер буйы шул белем менән эшләнең, тигән ҡараш ярамай хәҙер. Шуға ла башҡа төр уҡытыу системаһына күсеү ихтыяжы килеп тыуҙы. Йәғни, йәш кешенең уҡыу йортонда уҡ дөйөм юғары профессиональ белем алырға, был белем нигеҙендә хужалыҡтың төрлө тармаҡтарында эшләргә яраҡлы булыуы мотлаҡ. Мәҫәлән, педагогик белем үҙләштереп, ул бүтән социаль-гуманитар өлкәлә лә эшләй алырға тейеш. Был тәүге баҫҡыс бакалавр тип атала. Бакалавр - юғары белемле кеше, әммә был белем уға һөнәре буйынса эшләргә тулы әҙерлек бирмәй. Уның ҡарауы, бакалавр әҙерлеге бер генә түгел, ә бер нисә специальность буйынса уҡырға мөмкинлек бирә.

Рәсәйҙә бөгөн юғары уҡыу йортон тамамлаусыларҙың 20-25 проценты ғына үҙ һөнәре буйынса эш таба ала. Ҡалғандарға һөнәрҙе ҡабаттан үҙләштерергә тура килә. Шуға ла яңы уҡытыу системаһы, йәғни бакалавриат программаһы фундаменталь, тәрән, йөкмәткеле әҙерлек биреүҙе маҡсат итеп ҡуя. Был программа буйынса буласаҡ белгес үҙенә кәрәкте генә үҙләштерә һәм һәм бер үк йүнәлештең төрлө тармаҡтарына яраҡлаша ала. 11 йыллыҡ мәктәпте тамамлаусылар бакалавриатта 4 йыл, 12 йыллыҡ лицей, колледж белемен үҙләштереүселәр 3 йыл уҡыясаҡ. Яңы система әлеге студенттарға ҡағылмай.

Ә магистратурала айырым специальность буйынса күпкә тәүәлерәк, тәрәнерәк белем алырға теләүселәр уҡыясаҡ.

Аспирантураға иһә магистратураны тамамлаусылар һәм "белгес" квалификацияһы алыусылар ғына инә ала.

**● Экспертар магистратураның түләүле булыуын күҙаллай. Йәғни "белем алыуҙы кредитлау" тигән төшөнсә юҡтан ғына пропагандаланмайҙыр?**

- Мин дә ике баҫҡыслы системаны ура ҡысҡырып ҡаршы алыусыларҙан түгел. Мин дә уйланам, борсолам. Ләкин закон бар икән, беҙ уны үтәргә тейешбеҙ. Ә "аҡса янсығын әҙерләү" тигәнгә килгәндә, бакалавриатҡа инеүсе абитуриент бында ла, магистратурала ла бюджет иҫәбенә уҡый ала. 1 сентябрҙән ғәмәлгә инәсәк закон проектында бакалавриат һәм магистратура - бер юғары белем булараҡ ҡарала. Тимәк, бакалавриаттың түләүһеҙ бүлегенә ингәнһең икән, магистратурала ла түләүһеҙ уҡыясаҡһың.

Бер саҡ премьер-министр вазифаһындағы Егорь Гайдар ҙа "Түләүле белем биреү түләүһеҙгә ҡарағанда күберәк булырға тейеш", тигән идеяны алға һөргәйне. Ошо идея аҡрынлап барыбер тормошҡа ашырыла. Бюджет иҫәбендәге вуздарҙы финанслау ҡыҫҡартыла килә. Шуға күрә коммерция бүлектәренә студенттар ҡабул ителә. Быйыл да бюджет бүлектәренә ҡабул итеү 20 процентҡа тиклем ҡыҫҡарыуы мөмкин. Шулай ҙа мәктәптәрҙәге сығарылыш уҡыусылары иҫәбе кәмеүен дә онотмайыҡ. Әгәр ҙә бюджет урындарын ҡыҫҡартмаһаҡ, 2009 йылда сығарылыш синыф уҡыусыларының һаны вуздарҙағы урындар һаны менән тигеҙләшер ине.

**● Көнбайыш илдәрендә хәл башҡасараҡ. Әйтәйек, "General Electric", "Боинг" кеүек ҙур компаниялар бакалаврҙарҙы үҙ талаптарына яуап бирерлек белгес итеп үҙҙәре әҙерләй. Әммә Рәсәйҙә былай традиция юҡ һәм булыры әлегә билдәһеҙ.**

- Бакалавриат - финанс-иҡдисад йәһәтенән уңайлы уҡытыу системаһы. Ул әҙерлек сифатын кәметмәй. Схема шундайыраҡ: бакалавриат тамамлаған кеше ниндәйҙер фирмаға эшкә урынлаша. Ә һәр фирманың үҙ серҙәре бар. Әйтәйек, "Ямаха" һәм "Тойота" фирмалары. Улар дөйөм инженер белемле бакалаврҙы эшкә алып, үҙ технологияларына өйрәтә. Уҡытыу ваҡыты иһә етештереүҙең ҡатмарлылығына бәйле. Беҙҙә лә, моғайын, шулай булыр. Башҡасараҡ алым да бар: ниндәй ҙә булһа етештереү предприятиеһы вузға аҡса түләп, үҙенә кәрәкле белгесте заказ буйынса уҡытып ала.

**● Бакалаврҙарҙың психологик хәленән сығып һүҙ йөрөткәндә шундай һорау тыуа. Улар техникум, училище тамамлаусыларҙан әллә ни айырылмай ҙа кеүек, юғары белемен иҫбатлаусы дипломы булһа ла, тулы белемгә эйә булыр өсөн йәнә уҡырға кәрәк. Йәғни ике тапҡыр уҡырға инергә кәрәк буласаҡ: магистратураға "әлегеү" өсөн имтихан һәм конкурс аша үтеү мотлаҡ.**

- Был педагогик проблема түгел, был психологик проблема. Бакалавриатта уҡыусы үҙенең перспективаһы тураһында уйлай икән, өсөнсө-дүртенсе курстарҙа уҡ үҙенең киләсәк һөнәре тураһында уйлай башларға тейеш. Яңы стандарттар белем алыусы кешенең үҙаллылығын алға ҡуя.

**● Бакалавриат һәм магистратура системаһында тышҡы форма ғына түгел, уҡытыу программаларының йөкмәткеһе лә үҙгәрә. Быға беҙ әҙерме?**

-Үҙгәртеүҙәр тураһында һүҙ күптән килә ине. Бының менән махсус шөғөлләнеүселәр, фәнни-методик советтар бар. Һуңғы ун йыл эсендә уҡытыу стандарты (1997 һәм 2000 йылдарҙа) ике тапҡыр үҙгәрҙе. Хәҙер иһә өсөнсө быуын белем биреү стандарты көтөлә. Әлбиттә, йөкмәтке башҡаса буласаҡ. Дүрт йыл эсендә элекке биш йыллыҡ программаны үҙләштереп бөтөү генә түгел, белем биреүҙе тағы ла тулыландырыу күҙ уңында тотола бит.

Ике баҫҡыслы уҡытыу системаһының иң ыңғай яғы - Европа кимәленә яҡынлашыу, мобиллек. Рәсәй бакалавры, мәҫәлән, уҡыуын да, эшен дә үҙе теләгән илдә (Европа илдәрендә) дауам итә аласаҡ.

**Светлана НАСЫРОВА әңгәмәләште.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

☑ Өфө ҡала округы Советы депутаттары баш ҡала китапханасыларына һәм социаль хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡына 1000 һәм 500 һум ҡала өҫтәмәһе түләү тураһында ҡарар сығарҙы. Быға тиклем был хеҙмәткәрҙәр йәшәү минимумынан түбән эш хаҡы алып эшләй ине.

☑ X Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашып, "Өфө ҡала округы торлаҡ хужалығы идаралығы" МУП-ы "Идара итеүсе ойошмалар" номинацияһында иң яҡшыһы тип табылды.

☑ Ибраһимов бульварындағы трамвай юлдарын яңыртыу эштәре дауам итә. Был-тирәләге маршруттарҙа трамвайҙар хәҙер тауышһыҙ, йомшаҡ рельстар буйлап йөрөйәсәк.

☑ Май башынан льготасылар шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә электричкаларҙа ла түләүһеҙ йөрөй башлаясаҡ.

☑ Май айынан баш ҡаланың коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралыҡтары ихаталарҙы йәмһеҙләп ултырыусы ташландыҡ машиналарҙан ҡотолоу буйынса акция башлаясаҡ.

☑ Бөгөн Цюрупа урамы, 17-се йортта урынлашҡан Ҙур залда Салауат районы яҡташтар ойошмаһы осрашыу кисәһе ойоштора. Кисә 12 сәғәттә башлана.

☑ Өфөлә телефон террорсылары күбәйеп китте. Йыл башынан бирле, ниндәйҙер учреждение йә ойошмала бомба шартлаясаҡ, тигән 19 шылтыратыу ҡабул ителгән. Телефон террорсыларының барыһы ла тиерлек тотолған.

☑ Совет районында сығып килгән "Уфа-центр" гәзите мәктәпкәсә һәм мәктәп йәшендәге балалар араһында "Көмөш шишмә" тип аталған поэтик конкурс үткәрә. Конкурс 25 майға тиклем үтә. Уға йомғаҡ 1 июндә яһаласаҡ. Эштәр Революцион урамы, 111-се йортта 202-се бүлмәлә ҡабул ителә.

☑ Кисә Өфө ҡала округы хакимиәтенең мәғариф идаралығы Комаров исемендәге Балалар ижады йортонда мәктәп үҙидаралыҡтары лидерҙарының 1-се ҡала слетын үткәрҙе. Сараның маҡсаты - уҡыусыларҙың әүҙемлеген һәм мәктәп тормошона ҡыҙыҡһыныуын күтәреү, ойоштороу һәләтлектәрен һәм ижади инициативаларын үҫтереү ине. Һәйбәт һөйләшеү килеп сыҡты.

✓ ***Ишетеүемсә, ҡайһы бер урындарҙа "Мин үҙ өлөшөмдө колхоз иҫәбенә ҡалдырырға ризамын", тигән кеүегерәк ғариза яҙҙырғандар. Был законға ҡаршы килеү, алынмаған ерҙе нисек бирмәк кәрәк?***



*АҢ БУЛ, КЕШЕ!*

# ТАҒЫ ЛА ЕР ТУРАҺЫНДА,

## йәки Бөгөнгө көнөң иртәгәңдең тәүге көнө икәнен онотма



**(Башы 1-се биттә) .**

✓ Колхоз йә совхоз тарҡалған осраҡта ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе хосусилаштырыу мәсьәләһе буйынса дөйөм йыйылышты ауыл Советы йыя. Хужалыҡ тарҡалһа ла, уның 1992 йылға тиклемге картаһы һаҡлана. Ерҙе хосуси милеккә алырға хоҡуғы булғандарҙың исемлеге төҙөлгәндән һуң, дөйөм йыйылышта ошо исемлеккә ингәндәргә өлөш биреү-бирмәү тураһындағы мәсьәлә ҡарала. Исемлекте һис ҡурҡмайынса тышҡа, бөтәһе лә күргәндәй урынға элеп ҡуйырға кәрәк. Дөйөм йыйылыш кемгә ер бирелә, йә бирелмәй икәнен ҡарай һәм яңылыш индерелгәндәр исемлектән төшөп ҡала, инмәй ҡалғандар өҫтәп яҙыла. Яңы төҙөлгән исемлек менән хужалыҡ картаһын район үҙәгендәге ер комиссияһына алып барырға кәрәк. Район комиссияһы рәйесе исемлекте раҫлай. Бына ошо өс документҡа ( дөйөм йыйылыштың протоколы, исемлек, карта) өҫтәп, яңы ер кадастрын Өфөгә алып килергә ҡала. Республика комиссияһы дөйөм исемлекте теркәй һәм "Свидетельство о собственности" тигән яңы документ бирә. Уның күсермәһе ҡулға бирелә һәм исемлектә теркәлгәндәр ергә хосуси милексегә әйләнә. Әммә хосуси милексе үҙ ер өлөшөнөң ҡайһы урында икәнен белмәй, сөнки дөйөм майҙан әле айырым өлөштәргә бүленмәгән. Ошо документ Өфөнән әйләнеп ҡайтҡас ҡына теләге булғандар үҙ өлөшөн һорап ғариза яҙа.

Икенсе этапта һәр кемдең айырым үҙ участкаһын бүлеп алырға хоҡуғы бар. Мәҫәлән, биш кеше шундай теләк белдерһә, дөйөм йыйылышта уларҙың ғаризаһы тикшерелә һәм дөйөм майҙандан уларға айырым участка бүлеп бирелә. Дөйөм йыйылыштың хоҡуғы шунан ғибәрәт: ул бүленергә тейешле урынды билдәләй. Бына шундай ябай ғына тәртип. Яңы хосуси милексе өсөн айырым яңы документ төҙөлә. Теләге булған һәр кем, үҙ өйөнөң ихатаһын шәхси милек итеп теркәгән кеүек, үҙ өлөшөн хосуси милек итеп теркәй ала, быға уның тулы хоҡуғы бар. Ул документ "Федеральное свидетельство о собственности" тип атала. Өйөң йә башыңдағы кәпәсең үҙеңдеке булған кеүек, бүленгән ер участкаһы ла документ алған көндән - һинеке.

✓ Артабан яңы закон буйынса һәр граждан үҙенең ер өлөшөн шәхси хужалағы ( подсобное хозяйство) итеп теркәй ала. Мәҫәлән, үҙенең 28 сутый шәхси хужалығына өҫтәп, өлөшөнә төшкән өс гектар майҙанды ла теркәй. Бөгөн ошондай юл иң отошлоһо, сөнки шәхси хужалыҡты теләһә ниндәй артыҡ һалымдар менән яфалап булмай. Берәй яуаплығы сикләнгән йәмғиәт йә фермер хужалығы ойошторған осраҡта төрлө отчеттар бирергә, бухгалтер иҫәбе алып барырға, йә булмаһа, төрлө тикшереүҙәр аша үтергә тура киләсәк. Юридик ойошма асһаң, уны кире яба алмай йөрөүең бар - был махсус ҡабала. Шуға күрә туғандар йә бөтөн ауыл бергә тупланып, элекке кеүек община булып йәшәү отошло. Бөгөн ергә һалым бик түбән һәм ул һалымды ауыл, район Советы билдәләй - Өфө йә Мәскәү түгел. Ер һалымы кадастр хаҡының бары 0,3 процентын ғына тәшкил итә.

✓ Ер һәр саҡта ла маҡсатлы файҙаланыла. Мәҫәлән, һөрөнтө ерҙе төҙөлөш майҙанына әйләндереү өсөн уның яңы хужаларынан рөхсәт алырға кәрәк буласаҡ. Ер хужаһы үҙ майҙанында төҙөлөш эштәре алып бара ала, тик ситтән килгәндәр түгел. Был бик мөһим. Мәҫәлән, участкаң баҫыуҙың уртаһына тура килһә, уға юл һалыу өсөн махсус йүнәлеш картала күрһәтелергә тейеш. Шуға күрә айырым өлөшөн һорағандарға ер майҙанын ситтән биреү отошло буласаҡ. Әгәр хосуси милеккә алған ер элек ҡуртымға бирелгән булһа, яңы хужалар арендаторҙар менән яңы килешеү төҙөй, йә элеккеһен юҡҡа сығара.

✓ Ишетеүемсә, ҡайһы бер урындарҙа "Мин үҙ өлөшөмдө колхоз иҫәбенә ҡалдырырға ризамын", тигән кеүегерәк ғариза яҙҙырғандар. Был законға ҡаршы килеү, алынмаған ерҙе нисек бирмәк кәрәк? "Атай, бейә һатып алайыҡ, уның ҡолоно булғас, мин һыбай йөрөрмөн", - тип әйткән ти бит улы атаһына. Бында ла шуның кеүек, тыумаған ҡолондоң билен һындырып ҡуйырға мөмкин. "Федеральное свидетельство о собственности" тигән дөйөм исемлек теркәлгәс кенә айырым участка алыу тураһындағы һорауҙы ҡуйыу урынлы буласаҡ.

Был мәсьәләнең тағы бер яғы бар: ерҙе хужалыҡ ҡарамағына биргән саҡта "Минең ризалыҡтан тыш өлөшөмдө залогҡа һалмағыҙ", тигән ғариза яҙырға кәрәк. Ни өсөн тигәндә, кемдер һеҙҙең өлөштө залог итеп, кредит алырға һәм түләмәҫкә мөмкин. Был осраҡта ергә банк хужа буласаҡ. Шуға күрә төрлө уҙғынсыларҙан, аферистарҙан һаҡ булырға кәрәк. Шуны иҫтән сығарырға ярамай: ер ике тапҡыр бүленмәй, ул бер тапҡыр ғына бушлай бирелә. Мәҫәлән, Башҡортостан территорияһында ер меңәрләгән йылдар буйына бүленмәгән, был мөмкинлек тәүге тапҡыр бирелә - Президентыбыҙ 2004 йылдың 5 ғинуарында уҡ Законға ҡул ҡуйҙы.

**Радик ӨМӨТКУЖИН**
**яҙып алды.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бөгөнгө көнөң ҡалған ғүмереңдең тәүге көнө, тиҙәр. Тимәк, киләсәгең яҡты булһын өсөн уны бөгөн яҡтыртырға кәрәк - кисәгенең яҡтыһында ғына ирәйеп йәшәү килешмәй. Бөгөнгө көн киләһе йөҙ йыллыҡтың, мең йыллыҡтың, хатта мәңгелектең дә тәүге көнө бит әле! Яҡты киләсәк өсөн аҙым бөгөн яһала, иртәгә һуң булыуы ихтимал. Иҫтә тотоғоҙ: ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәрҙе хосусилаштырыу хоҡуғы 2008 йылдың 1 ғинуарында үҙ көсөнән сыға...**

*ҒӘФҮ ИТ...*

# ЯРАТЫП ЙӘШӘЙЕМ - шул да еткән

**Бала саҡта ғына яҙҙы айырыуса шатланып, мөғжизәләй күреп ҡабул итәбеҙ кеүек ине. Тәҙрә аша ҡулын һуҙып, ҡояш һине урамға саҡырып торғанда, өйгә түгел, үҙ күңелеңә үҙең һыйып ҡара! Ишек төбөндәге оло быйма ҡаталарын эләктереп, хәҙер инәм, тип кенә сыҡҡанда ла донъяңды онотаһың. Һап-һары нурҙарға күмелгән урамдың рәхәтлеге... тамсылар ҙа "тып-тып" тип түгел, "сыҡ-сыҡ" тип саҡырғандай.**

Эй шаяраһың, эй ҡыуанаһың. Ҡата эстәренә һыу тулғанын да, еңдәргә бысраҡ сәсрәгәнен дә тоймайһың - бер нимә лә, бер кем дә кәрәкмәй кеүек. Әллә яҙҙы шулай яратыуыбыҙ, әллә донъяны? Әллә йыл да ҡабатлана торған ғәҙәти яҙҙы башҡаса күңел менән ҡабул итеүебеҙ был?

Нәҡ шулай балаларса ҡыуанып яҙ ҡаршылауым Һинең менән осрашҡанда ҡабатланды. Оло Өфө урамында рәхәтләнеп көлә-көлә, йырғанаҡтан кәмә ағыҙғайныҡ, хәтереңдәме? Беҙҙең быңдай ят ҡыланышҡа берәүҙәр сәйерһенеп ҡараны, икенселәр көлөп үтте. Беҙ иһә урамдағы, ә, бәлки, йөрәктәге яҙҙан башҡа бер кемде лә күрмәнек тә, ишетмәнек тә. Тормошома яҙ килгән, бәхетле саҡтарым. Һәр көҙөм, һәр айым, һәр көнөм яҙға әйләнде.

Һин миңә йөрәгеңде тәҡдим иттең, ҡулымды һораның. Тик мин кире ҡаҡтым. Ниңә? Үҙем дә аңламаным. Һинһеҙ килер бөгөнгөмдө күҙ алдына ла килтерә алмай инем бит. Унан һуң, уҡып бөтөүөмде көтөп, тағы ла дүрт йыл осрашыуҙар эҙләнең. Үлеп яратһам да, араларҙы яҡынайтмаҫҡа тырыштым. Сәбәбе...

Атайыңдың гел эсеп, әсәйеңде туҡмап, һеҙҙе ыҙалатып йәшәгәнен беләм. Беҙҙең ғаиләлә лә шулай булды. Атайымдан күргән бөтөн ыҙалар телем-телем булып йөрәгемдә ҡалған. "Ояһында ни күрһә - осҡанда ла шуны ҡабатлай," тиҙәр. Шундай яҙмышты ҡабатлауҙан ҡурҡтым. "Үҙҙәре күреп үҫкәндән һабаҡ алып, киреһенсә, бер-береһен нығыраҡ ҡәҙерләп йәшәүселәр ҙә бар," тигәндәрен дә ишеттем. Барыбер ҡурҡтым. Ышаныс юҡ, тимәк, юл да бирәү - ҡасыу.

..."Йәш бара - ғаилә ҡорорға, балалар үҫтерергә ваҡыт", тигәйнең. Өйләнгәненә өс йыл самаһы, бала табырға ашыҡмайһығыҙ. Өйөңдән сығып киткән саҡтарың да бар икән. Минең хаҡта: "Ни хәлдә икән, бәхетлеме икән? Мин уны һаман да күңелемдә әсирлектә тотам һымаҡ. Бәхет юлдарын ҡаплайымдыр кеүек," тигәнһең дуҫыңа.

Таныһаң - яуабымды аңларһың. Ҡасандыр һинән төңөлөргә, оноторға теләгәндә мин үҙемде йыуатырлыҡ сара эҙләнем. "Һинең барлығыңа рәхмәт, һинең был донъяла булыуың үҙе үк рәхәт, үҙе үк бәхет миңә," тип уйланым. Иң оло рәхмәтем Һинең әсәйеңә! Һиңә ғүмер биреп, мине мөхәббәтле итте ул. Һине яратып йәшәүем миңә көс бирә икән - шул еткән. Бергә булһаҡ, бер-беребеҙҙән ҡасан да булһа ялҡырбыҙ ҙа, ошо тиклем оло хистәрҙе юғалтып ҡуйырбыҙ һымаҡ ине. Әммә... тормошомда ниндәй генә шатлыҡ кисерһәм дә, нимәгәлер борсолһам да, Һинең менән бүлешкем килә. Һинһеҙ улар тулы түгел кеүек. Хатта берәй егет менән осрашыуға барып, киләсәгем өсөн бәләкәс кенә бер өмөт уянғанда ла, Һинең быларҙы күреп тороуыңды теләйем. Юҡ, көнләштерер өсөн дә, тормошомдоң башҡаса булыуын иҫбатлар өсөн дә түгел. Бәлки, яратҡан күңеленә һыйыныр, ышыҡланыр, йыуаныс табыр өсөндөр. Яратҡан күңел генә аңлай ала, кисерә белә бит. Ғәфү ит мине, кисер...

**ҒӘЛИӘ.**

## Б Ә Л Ә К Ә Й  Ҡ А М У С

### БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ



Таштар, ҡаялар донъяһы ғәжәйеп ҡыҙыҡлы, үҙенсәлекле. Тауҙарҙа ғына түгел ҡайһы саҡта тип-тигеҙ ерҙә йәки океан, диңгеҙ урталарында ла һерәйеп торған бейек ҡаялар, тау теҙмәләре формаһы менән ҡорамдарҙы, уҡһаҙаҡлы яугирҙе, йоҡоға талған һылыу ҡыҙҙы йә ҡырағай йыртҡысты һәм башҡа күренештәрҙе кәүҙәләндереүе менән һоҡландыра.

Шотландия ярында ҡуйы ҡыҙыл төҫтәге кристалл базальт таштарынан торған утрау бар. Утрау һыу аҫтынан атылған вулкан базальтты иретеп, бер тигеҙ ҙурлыҡта "юнып-йышып" ер өҫтөнә сығарып ташлауынан барлыҡҡа килгән.

Ә "йыһан ҡунағы" метеориттар хасил иткән кратерҙар ҙурлығы менән күңелгә шом һала. Уларҙың ҡайһы берҙәре ваҡыт үтеү менән ергә күмелеп йә һыу аҫтында ҡалып бөткән. Америкалағы Аждаһа Каньон тип аталған кратерҙы күрер өсөн йыл һайын бөтөн донъянан меңәрләгән кеше килә. Ул шундай ҙур, хатта бер сигенән икенсеһе күренмәй. Аждаһа кратерын хасил иткән метеор бынан 40 мең йыл элек ергә секундына 20 километр тиҙлектә осоп килгән. Уның шартлағанда бүленеп сыҡҡан энергияһының көсө 1880 йылда Индонезияның Кракатау утрауын юҡ иткән вулкандыҡы менән бер тиң, ә Тунгусс метеоритынан 50 тапҡырға көслөрәк була.



Ғалимдар йыл һайын Ергә уртаса ҙурлыҡта 150 метеорит төшә, ти. Бәхеткә күрә, АҠШ-тың Аризона штатындағы (һүрәттә) яланға төшкән кеүек ҙур метеориттар 75 миллион йылға бер тапҡыр ғына осрай. 1970 йылда Попигай йылғаһы янында диаметры 95 километр, тәрәнлеге 400 метр ҙурлыҡта кратер барлыҡҡа килтергән метеорит төшә. Ә Англияның Эскол утрауына секундына 25 километр тиҙлектә осоп төшкән метеориттың диаметры 120 километр ҙурлыҡта була.

✓ ***Өләсәйемдән: "Башҡорттар янында ғүмереңде үткәргәнеңә үкенмәнеңме?", - тип һораным. Өләсәйем: "Нишләп үкенергә тейешмен әле мин, бәхетле булғанға үкенмәйҙәр", - тип яуап бирҙе.***



КОНКУРС: "МИН БЕЛГӘН УРЫҪ"

# БӘХЕТКӘ ҮКЕНМӘЙҘӘР

**Тыуған яғыма ҡайтҡанда ауылдың тын кистәрен өләсәйем янында үткәрергә яратам. Их, ул унең менән бер ултырып һөйләшеүҙәр...**

Өләсәйем хәтер ептәрен ашыҡмай ғына һүтә, мин тыңлай-тыңлай хыялдарға биреләм һәм һиҙҙермәй генә өләсәйемә күҙ ташлап ҡуям. Ябай башҡорт ҡатындарына ғына хас хәрәкәттәр, йылмайыу, талғын ғына тауыш, нур бөркөп торған күҙҙәр. Уның исеме - Анастасия Иван ҡыҙы Ҡансурина. Башҡорт ауылына килен булып төшкән урыҫ ҡыҙы күптән инде ерле халыҡҡа өйрәнеп, йола-ҡанундарын ҡанына һеңдереп, ейәндәрен көтөп йәшәй.

Минең өләсәйем сығышы менән Ырымбур өлкәһенән. Атаһын һуғыш ғәрәсәте йотҡас, баш бала булараҡ, әсәһе менән бөтә ауырлыҡтарҙы берҙәй кисерә. Аксаһыҙлыҡ өләсәйемде Ырымбур ҡалаһына сығып китергә мәжбүр итә һәм ул тимер юлы төҙөлөшөнә эшкә урынлаша. Тап ул эшләп йөрөгән мәлдә олатайым Ишкилде Зарип улы Ҡансурин, ете йыллыҡ хәрби хеҙмәтен үтәп, ҡайтып барған була. Береһе русса, икенсеһе башҡортса аңламаған егет менән ҡыҙ бер-береһенә ғашиҡ була. Олатайым ҡыҙҙы үҙенең тыуған яғы Йылайыр районы Юлдыбай ауылына алып ҡайта. Тәүҙә өләсәйемә бик ауырға тура килә - сит ауыл, сит кешеләр, етмәһә, телде аңламай... Бөтөнләй яңы ҡатмарлы ла, бер үк ваҡытта бәхеткә лә тулы тормош башлана. Ҡартатайым, балта оҫтаһы булараҡ, көнө буйы эштән бушамай. Өләсәйем ҡарт ҡәйнәһе менән йорт тирәһендә булыша. Бер-береһенең телен аңламаған ике ҡатын ым менән аңлаша-аңлаша, эш бөтөрә. Йылдар үтә. Өләсәйем аҡрынлап башҡорт донъяһына инә, телде өйрәнә, йолаларҙы үҙ итә, башҡорт балалары үҫтерә. Урысса әллә ни һөйләшә лә белмәй инде ул хәҙер. Урыҫ ҡыҙы тип уйламаҫһың да. Ислам динен тота, аяттар уҡыта, йома һайын хәйер бирә, ураҙа тота.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бына ете йыл инде олатайым яҡты донъяла юҡ. Ләкин өләсәйем яңғыҙы түгел. Уның биш ҡыҙы, кейәүҙәре, ейәндәре бар. Уларға йөрәген баҫып, донъянан йәм табып йәшәргә тырыша өләсәйем.

Мин нисектер өләсәйемдән: "Башҡорттар янында бар ғүмереңде үткәргәнеңә бер ҙә үкенмәнеңме?", - тип һорарға баҙнат иттем. Өләсәйем күҙҙәремә тултырып ҡараны ла: "Нишләп үкенергә тейешмен әле мин, бәхетле булғанға үкенмәйҙәр", - тип яуап бирҙе.

**Милә ДӘҮЛӘТСУРИНА.**

# АУЫЛҒА ТӨШКӘН КЕЙӘҮ

**Баймаҡ районының Төркмән ауылына 90-сы йылдар аҙағында алыҫ Себер яҡтарынан ҡатыны - башҡорт, ире урыҫ булған Холодныйҙар ғаиләһе күсеп килде. Башҡорт ҡыҙы артынан эйәреп килгән урыҫҡа беҙҙең ауыл халҡы "Нисек улай башҡорт ауылына күсеп киләһе булды икән?" тип, башта бик аптыраны.**

Әйткәндәй, беҙҙең ауылда Николайҙар икәү булды. Ауылда улар хаҡында лаҡап йөрөй ине: "Беҙҙәге Николайҙарҙың береһе холодный, икенсеһе голодный". Икенсе Николай берәҙәк тормош алып барҙы, эскелек менән мауыҡты, өйләнмәне. Шунлыҡтан, донъя менән дә бик иртә хушлашты.

Ә Николай Холодный иһә бөтә кешене хайран ҡалдырып, бындағы башҡорттар ыңғайына матур итеп донъя көтөп алды ла китте. Кесерткән, алабута, әрем һәм башҡа ҡый үләне үҫкән урынды таҙалап, ҡырып-һеперең, баҡса ултыртты Николай. Совхоз эшендә лә әүҙем булды. Металлоломға тәғәйенләнгән тракторҙы йүнәтеп, эшләтеп ебәрҙе. Башта "урыҫ" тип ятһынһалар ҙа, һуңынан ихласлығына, ярҙамсыллығына, урындағы халыҡтың көнитмешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен үҙенекеләй ҡабул итеүенә һоҡланған ауылдаштарым уны ысын күңелдән хөрмәт итә башланы.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тормош гелән генә ал да гөл булмай шул. Николайҙың ҡатыны Венера ҡапыл ғына ауырып китеп, түшәккә йығылды. Өс ай дауамында хужабикә дауаханала ятып сыҡты. Николай ғаилә усағын һүндермәй, ҡатыны һауыҡһын өсөн барыһын да эшләне. Ниндәйҙер сихри нур бар кеүек улар араһында. Ошо нур, мөхәббәт арҡаһында Венера һауығып, аяҡҡа баҫты.

Ҡул ҡауышырып, эш юҡ, тип ултырғандарын күргәне юҡ ауылдаштары Холодныйҙарҙың. Венера бәйләм бәйләй, Николай ауыл халҡынан һөт һатып алып эшкәртә. Быға тиклем ошо эшкә ауыл советы ла, совхоз да тотонғаны юҡ ине. Николайҙың бәләкәй генә бизнесы тотош ауылға ҙур файҙа килтерә.

**В. ИШМОРАТОВА.**

Баймаҡ районы.

# БАЛАЛАРҒА БУЛДЫ ӨЛӘСӘЙ

**Беҙҙең Иглин районының Түбәнге Ләмәҙ ауылы - райондың иң ҙур башҡорт ауылы һанала. Беҙҙең ауылдан туғыҙ саҡрым алыҫлыҡта ғына Мана-Гора исемле урыҫ ауылы урынлашҡан. Мин шул ауыл кешеһе Христолюбова Татьяна Осиповна хаҡында яҙып китмәксемен. Уның ата-әсәһе ун туғыҙынсы быуат аҙағында Волго-Вятка өлкәһенән күсеп килгән.**

Беҙҙең тетя Таняға быйыл 91 йәш тулды. Бер быуатҡа яҡын ғүмер йәшәһә лә, әбейҙең зиһене иҫ киткес яҡшы: ул был яҡта граждандар һуғышының, коллективлаштырыу осоронoң, Бөйөк Ватан һуғышының нисек үткәнен иҫләй. Оҙаҡ йылдар тракторсы, комбайнсы, шунан ашнаҡсы булып эшләй.

Әбей яңғыҙы йәшәгәс, ауылға ситтән эшкә килгән кешеләрҙе һәр саҡ уға фатирға индерәләр ине. 1986 йылда Ләмәҙ ҡортсолоҡ совхозына Ишембаев Әрхәт Миңнеғол улы эшкә ебәрелә һәм йәш белгесте Таня әбейҙең өйөндә урынлаштыралар. Әсә менән ул кеүек, байтаҡ ваҡыт бергә йәшәй улар. Әрхәт өйләнгәс, ҡартайған, донъя көтөргә кәрә ҡалмаған әбейҙе үҙенең ғаиләһенә ала. Хәҙер Татьяна Осиповна башҡорт ғаиләһендә бәхетле ҡартлыҡ көндәрен кисерә. Башҡортса һөйләшә, беҙҙең халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен, йолаларын хөрмәт итә. Ул балалар тәрбиәләүҙә лә ихлас ҡатнаша - Светлана һәм Әрхәттең өс улы уның өсөн үҙ ейәндәренә әйләнгән.

**Гөлирә МЫРҘАҒӘЛИНА.**

Иглин районы.

# "ДЯДЯ ВАНЯ" ТИП ЙӨРӨТТӨК

Шишмә районы Биҡкол ауылы янында Пенза исемле урыҫ ауылы урынлашҡан. Колхоздарҙы эреләтеү осоронда биш ауылдан торған колхоз төҙөп, ике күрше ауыл бер бригада булып китте. Бригадир итеп Пенза ауылы кешеһе Иван Лукъянович Куликовты ҡуйҙылар. Берәүҙәр урыҫ телен белмәгәнгә хафаланды, икенселәре "урыҫ атаң булһа, билеңдә балтаң булһын", тигән мәҡәлде иҫләп, уртын сәйнәне.

Һуғыштан һуңғы йылдар... Иҫ киткес ярлылыҡ, хәйерселеккә өҫтәп, утын мәсьәләһе бик ҡырҡыу тора. Урман ҡарауылсыһы утын алып ҡайтып барғаныңды күрһә, балтаңды тартып ала ла, санаңды сапҡылап, акт яҙыу менән янай.

Сана булмағас, утынды арҡаға йөкмәп ташыйым. Бер көн шулай утын йөкмәп, ҡайтып киләм. Ҡапыл арттан ат юрттырып килә ятҡанын шәйләп ҡалдым. Балтаны тиҙ генә ҡарға тыҡтым да, көрт булһа ла, юлдан ситкә сығырға маташҡан булдым. Атлы минең янға килеп туҡтаны. Ҡараһам, теге яңы бригадир баҫып тора. Ярым русса, ярым башҡортса мине эргәһенә саҡыра, ҡурҡмаҫҡа ҡуша. "Где атайка, лошадь надо брать", - тигән һүҙҙәре ҡолағымда һаман сыңлап тора. Утынымды санаһына күтәреп һалды ла, мине ултыртып, ауылға табан юл тотто. Бригадир ярҙамсыһына, ат ҡараусыһына ни тигәндер, шунан һуң, һирәкләп булһа ла, әсәйем менән ат егеп, утынға бара башланыҡ.

Әсәйем атайым фронтта үлеп ҡалғас, икенсе кешегә кейәүгә сыҡҡайны. Үгәй атай ике бәләкәй балаһын ҡалдырып, өйҙән сығып китте. Бәләкәй балалары булғас, әсәйем колхоз эшенә сыға алманы. Шуға күрә уны колхоздан сығарып, өс-дүрт йыл буйы бесән әҙерләргә пай бирмәй этләнеләр. Ваня ағай был хәлде белеп ҡалғас, йыйылыш яһаны, әсәйемде яңынан колхозға алдылар. Мин дә бик иртә колхоз эшенә егелдем. Пенсияға сыҡҡанда стажым тураһындағы документты 11 йәштән иҫәпләп бирҙеләр. Ул саҡта колхозда "Үҫмерҙең хеҙмәт кенәгәһе" тигән документ бирелә ине. Йәш үҫмер йылына 90 хеҙмәт көнө эшләргә тейеш булған. Мин ул норманы һәр йыл үтәп килгәнмен, сөнки штатлы эштә ферма малдарын көтөшә инем.

Ваня ағайҙың өй һалғанда ла ярҙамы бик ҙур булды. Беҙгә генә түгел, башҡаларға ҡарата ла ярҙамсыл, итәғәтле, үтә ғәҙел ине ул. Ул башҡорттарҙы, башҡорттар уны үҙ итте, "Дядя Ваня", "Лукъяныч" тип өҙөлөп торҙо, хөрмәт итте. Әле лә, "Их, Ваня ағай кеүек кешеләр булһа, ауылдар, колхоздар аяныс, ауыр хәлгә ҡалмаҫ ине", тип уйлап ҡуям.

**Ғәлимйән ТӨХВӘТУЛЛИН.**

Шишмә районы.

# ҺАРЫ АУЫЛЫНДАҒЫСА

Төркмәнстанда сик буйы ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткән сағым. Өс айлыҡ "учебка"нан һуң, беҙҙе сик буйы заставаһына ебәрҙеләр. Төндә килеү сәбәпле, бер-беребеҙ менән ҡыҫҡаса ғына таныштыҡ та, тамаҡ ялғап, йоҡларға яттыҡ.

Икенсе көндө һалдаттар менән яҡынданыраҡ танышыу өсөн, үҙем тәмәке тартмаһам да, "курилка"ға йүнәлдем. Унда өс урыҫ егете: Силәбенән - Алексей Николаев, Магниттан - Петр Доронин, Орел өлкәһенән Сергей Волобуев гәп һата ине. Урыҫса икмәк-тоҙлоҡ һупалағас ни, тегеләр меәнн арыу ғына хәбәр һатып ултырҙым. Шул саҡ эргәмә Тәтешле егете Илфат Ғилметдинов килде. Мин әйтәм: "Был урыҫтар менән һөйләшеп, тел көрмәлеп бөттө, әйҙә, рәхәтләнеп башҡортса һөйләшәйек әле". Тегеләрҙең, йәғни урыҫтарҙың, беҙҙә ҡайғыһы юҡ, үҙ-ара кинәнеп көлөшәләр. Шулай ҙа береһе, Алексей атлыһы, беҙҙең яҡҡа ҡарап-ҡарап ҡуя. Мин: "Бынау урыҫ беҙҙең һөйләшкәнде как будто аңлай инде, эй тыңлаған була", - тигән булам. Алексей шарҡылдап көлөп ебәрҙе лә: "Как будто ғына түгел, һеҙҙең һөйләшкәнде тулыһынса аңлап, ирмәк итеп тыңлап ултырам", - тип башҡортсалап әйтеп һалмаһынмы! Минең ауыҙ китте асылып. Шунда ла Алексей юғалып ҡалманы: "Яп ауыҙыңды, Төркмәнстан себендәренең "тормозы" юҡ", - тип шаяртты.

Баҡһаң, Алексей Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ районы Һары ауылы егете икән. Атаһы - урыҫ, әсәһе - башҡорт. Алексей менән беҙ ике йыл хеҙмәт иткән дәүерҙә иң яҡын дуҫтарға әйләндек. Әрменән ҡайтҡас та бәйләнеште өҙмәй, хат алышып, телефондан хәбәрләшеп торабыҙ.

2006 йылдың йәйендә кәләшем Гүзәл, улым Динислам менән дуҫыма ҡунаҡҡа барҙыҡ. Беҙҙе дуҫымдың ҡатыны, башҡорт һылыуы Лилиә һәм уларҙың балалары ихлас ҡаршы алды. Икенсе көндө Алексей, барлыҡ туғандарын йыйып, Ҡалды күле буйына алып сыҡты. Күстәнәскә мин данлыҡлы Байрамғол ҡымыҙын алғайным. Табын артында урыҫсалап маҡтап-маҡтап, ҡымыҙ менән һыйлайым тегеләрҙе. Улар ҙа тел сартлатып: "Эх, отличный кумыс", - тип һемерәләр. Алексейҙың атаһы Михаил Иванович беҙҙе тыңлап ултырҙы ла: "Нимә унда урыҫса һөйләшеп ултыраһығыҙ, бында урыҫтар юҡ та инде", - тип саф башҡортса әйтеп һалды.

Бына шулай, бәғзе бер башҡорттар үҙ телен онотоп, вата-емерә сит телдә һөйләшкәндә, "Эх, Һары ауылына барып, урыҫтарҙың саф башҡортса һөйләшеүҙәрен ишетеп ҡайтһағыҙ ине", тип уйлайым. Үҙ телебеҙҙән, үҙ милләтебеҙҙән оялмай, берҙәм йәшәйек, башҡорттарым!

**Салауат АБДРАХМАНОВ.**

Учалы районы.

✓ Ноғман ағай Мусин бер осрашыуҙа: "Ғаилә ҡороп йәшәү - үҙе ҙур шағирлыҡ", - тине. Был һүҙҙәр миңә ҡанат ҡуйғандай булды. Рамаҙан ағай Өмөтбаевтың һүҙҙәрен һис онотмайым: "Туғаным, һиңә ҡарап, башҡорт булғы килә", - тине ул.



МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# Нәфрәтләнмә

**Кеше ҡапма-ҡаршылыҡлы көслө хис-тойғолар тулҡынында йәшәй. Тормош тәжрибәһе туплап ҡына, яҡшыны ямандан айыра. Үҙенә ҡарата яуызлыҡ ҡылыуҙарына ярһый, әммә изгелекте тыныс ҡабул итеүсән. Изгелек - тәбиғи хәл, ул кешегә һыу һәм икмәк кеүек, көн дә кәрәк. Бәлки, шуғалыр ҙа, кеше изгелеккә рәхмәтле булырға онотоп ебәрә. Ә яуызлыҡ - бармаҡҡа ҡаҙалған сәнскеле шырау һымаҡ. Уны эсеңдән алып ташларға кәрәк. Ярһыу, нәфрәтләнеү - бик күп мәкерлекте үҙ эсенә алған яуызлыҡҡа битараф булмауҙы сағылдыра.**

Асыу-ярһыу - күңелгә зарарлы яман тойғоларҙың береһе, уны аңдың ваҡытлыса юйылыуы, тип тә билдәләйҙәр. Асыулы булыу, ярһыу ғилемле, иң лайыҡлы кешене лә түбәнһетеп, ҡолға әйләндерә. Шуның өсөн кеше күңелендәге был яман тойғоно тышҡа сығармаҫҡа, баҫырға тейеш. Берәүҙең ҡапыл нимәгәлер ҡыҙып ярһыуы, янындағыларға, бигерәк тә үҙенә ауыр тәьҫир итеп, күңелһеҙ тойғо ҡалдыра. Ғәҙәттә, асыу менән башланған сафсата оятҡа ҡалыу менән тамамлана, сөнки ярһыулыҡ кешене бысраҡ һүҙҙәр әйтергә мәжбүр итә һәм насар ҡылыҡҡа этәрә. Ярһыған хәлендә бәғзе берәүҙәр хатта диненән дә баш тарта. Имам Ғаззали, мәҫәлән, "Ихйәү Әләме-д-Дин" тигән әҫәрендә: "Ярһыулығы тоҡанып, ялҡыны көсәйә барған һайын, кешенең күҙенә ҡан һауа. Ярһыу бер кемдең дә кәңәшен тыңларға ирек бирмәй, киреһенсә, өгөт-нәсихәт уны тағы ла нығыраҡ ҡабарта. Асыу, нәфрәт зиһен яҡтылығын һүрәнләндерә, хатта аҡылдан яҙҙыра",- тип яҙа. Ярһыулығын еңә белгән кеше үҙен бик күп бәләләрҙән ҡурсалай.

Көсһөҙлөк, мәкер һөҙөмтәһе булған ярһыусанлыҡ кешене физик һәм психик яҡтан ҡаҡшата. Ғөмүмән, ул кеше ғүмеренә хәүеф янаусы яман сифат. Кеше ярһығанда организмы тетрәнеүҙән бөйөр өҫтө биҙҙәре адреналин бүлеп сығара башлаһа, ҡан баҫымы күтәрелә һәм йөрәк тибеше йышая...

Дошманлыҡ хистәре көсәргәнеше йөрәк, астма, мигрень, быуындар һыҙлауы һәм ашҡаҙанда сей яра сирҙәренә юл аса, йөрәкте ваҡытынан алда туҙҙыра. Тиҙ тоҡаныусан, ярһыу кешеләр араһында йөрәге ҡапыл туҡтап үлеүселәр күп. Бер мәртәбә йөрәк өйәнәге кисереүселәрҙә уның икенсе тапҡыр ҡабатланыуына шик көсәйә һәм хәүеф көтөп, ҡурҡып йәшәүҙән фалиж һуғыуы мөмкин.

Бөтөн ошо бәләләргә тарымау өсөн юҡҡа-барға ярһымау, күңелдә асыу йөрөтмәү ҙә етә. Ярһыу ғәҙел булған осраҡта ла үҙеңде ҡулға алырға, сабыр, түҙемле булырға кәрәк. Ғөмүмән, муйын тамырҙарың бүртенер кимәлгә етеп ярһыу кешене биҙәмәй. Бәйғәмбәр, әгәр кеше күҙенә ҡан һауғансы ярһый икән, "әғү-ҙү- билләһи мин-аш-шайтан ирразим", тип әйтергә ҡушҡан. Ул шайтандан һәм уның яуызлығынан ҡасып, Аллаһы Тәғәләгә һыйынам, тигәнде аңлата. Кешелә асыуҙы, мәкерҙе шайтан ҡоторта. Әгәр кеше ошо хәҡиҡәттең асылына төшөнөп, Алла яҡлауына килһә, ул ярһыуының сәбәбен еңеп, үҙ хәленә ҡайта.

Кешелә кешене тәрбиәләгән Ислам дине, бөйөк программа булараҡ, кешенең теләһә ҡайһы тиҫкәре тойғоларын контролдә тота белеүен тәрбиәләүҙе төп маҡсаты итеп ҡуя. Ҡөрьәндә, ысын диндарҙарға баһа биреп, иң мәрхәмәтле һыҙаттарҙың береһе - ул ярһыуыңды тыя белеү сәнғәте, тиелгән.

**Революцияға тиклем Себергә һөргөнгә ебәргәндәр. Уларҙы беҙ ғорурлыҡ менән иҫкә алабыҙ. Батша хөкүмәтенең көслө баҫымына, шул замандың ҡалыбына һыймаған кешеләр булған улар. Брежнев осоронда Себергә оҙон аҡса артынан ҡыуғандар юлланды. Уларға сәйерһенеберәк ҡараныҡ. Бөгөн Себергә оҙон аҡса артынан ғына китмәйҙәр, ғаилә аҫырау сараһы эҙләп юлланалар. Билдәле шағир Хисмәт ЮЛДАШЕВтың да ижади мөхиттән ситләшеп, ситкә юлланыуы сәйер холоҡ һымаҡ тойолдо. Тәү ҡарамаҡҡа ғына шулай икән. Хәйер, үҙ яҙмышы, ижады тураһында шағирҙың үҙ ауыҙынан сыҡҡанды тыңлағыҙ, бәлки, ҡарашығыҙ үҙгәрер.**

# Шағирлыҡ - һунарсы ҡоштоң ҡорбанына

## ҒАИЛӘ ҠОРОУ - ҮҘЕ ШАҒИРЛЫҠ

Ниңәлер шағирҙар яҙмышы фажиғәле. Был, бәлки, уларҙың донъя ҡалыптарына һыя алмауынан киләлер, тип уйлайым. Уйлана торғас, ниңә, мин шағирмын, тип, туғандарым, ауылдаштарым, халҡым алдында меҫкен булып йөрөргә тейеш, тигән һорау ҡуя башланым. Яҙғандарым нисек булғандыр, белмәйем, әммә мин, бер нигә ҡарамай, үҙемде тик шағир итеп тоя инем. Тормошҡа, ғөмүмән, ижадыма ҡараш үҙгәргәс, теҙгенде бушатырға тура килде, сөнки шағир булып йөрөү күп зыян килтерҙе. Шағир булыр өсөн мин ғаиләнән ситтә күңел асырға, шағир дуҫтар менән аралашырға тейеш инем. Ноғман ағай Мусин бер осрашыуҙа: "Ғаилә ҡороп йәшәү - үҙе ҙур шағирлыҡ", - тине. Был һүҙҙәр миңә ҡанат ҡуйғандай булды. Рамаҙан ағай Өмөтбаевтың һүҙҙәрен һис онотмайым: "Туғаным, һиңә ҡарап, башҡорт булғы килә", - тине ул. Уның ихлас күңелдән әйткән һүҙҙәре ҙур яуаплылыҡ тойғоһо өҫтәне. 80-се йылдарҙа Әхмәт ағай Лотфуллиндың оҫтаханаһына барып, уның эштәре менән ҡыҙыҡһынып, үҙе менән оҙаҡ итеп һөйләшеп ултыра торғайным. Бер көн ул урамда тап булып: "Туғаным, рәхмәт һиңә", - ти. Мин аңламаным. "Матур йөрөйһөң, үҙебеҙҙең халыҡты күтәреп йөрөйһөң", - тине ул. Ысынлап та, үҙемә-үҙем йәмһеҙ күренгән саҡтарым булды шул. Ниңәлер, үҙебеҙҙең башҡорт араһында үҙеңде әллә кемгә ҡуйып, матур йөрөүҙән нык уңайһыҙлана торғайным. Хәҙер генә аңланым: матур күренеү өсөн, баҡтиһәң, бик күп көс кәрәк - ул бит һинең һаулығың, эске торошоң. Кешенең матур, яғымлы күренеүе - ул донъяны, кешеләрҙе бер тамсы ҡыланыуһыҙ яратыу. Ҡара эсле кеше күпме ҡыланһа ла, матур күренә алмай. Күпме генә кире яҡтары булмаһын, донъя барыбер ҙә яҡтыра бара: бына тигән республикам, халҡым бар, бәхетһеҙ булырға, мохтаж йәшәргә хаҡым юҡ, сөнки минең өс балам бар. Ошолай фекер йөрөткәндә, минән дә бәхетле кеше юҡ. Ир булараҡ, атай булараҡ, мин ғаиләмде етеш йәшәтергә тейеш. Сабырһыҙ кеше мин, ниндәйҙер ҡалыпҡа һыйып йәшәй алмайым. Нимәнәндер ялҡһам, түҙмәйем, ҡасам - рәхәтлеккә түгел, ауырға ҡасам. Матди етешлекте уйлап, Себер сығып китеүемдең, бәлки, төп сәбәбе ошолор. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә, минең шағирлығым башҡалар өсөн мөһим түгеллеген аңлай башланым. Етәксе өсөн иң тәү нәүбәттә хеҙмәтсе кәрәк, теләй-һеңме-юҡмы, урындағы талаптарға буйһонорға, ниндәйҙер ҡалыпҡа яраҡлашырға, һыйырға тейешһең. Бөтә нәмәлә лә маһир булып булмай: яҡшы атай ҙа, яҡшы ир ҙә, шағир ҙә, хеҙмәткәр ҙә булыуы һәм ижади мөхиттән дә айырылмауы еңел түгел.



*Ир булараҡ, атай булараҡ, мин ғаиләмде етеш йәшәтергә тейеш. Сабырһыҙ кеше мин, ниндәйҙер ҡалыпҡа һыйып йәшәй алмайым. Нимәнәндер ялҡһам, түҙмәйем, ҡасам - рәхәтлеккә түгел, ауырға ҡасам. Матди етешлекте уйлап, Себер сығып китеүемдең, бәлки, төп сәбәбе ошолор. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә, минең шағирлығым башҡалар өсөн мөһим түгеллеген аңлай башланым. Етәксе өсөн иң тәү нәүбәттә хеҙмәтсе кәрәк, теләйһеңме-юкмы, урындағы талаптарға буйһонорға, ниндәйҙер ҡалыпҡа яраҡлашырға, һыйырға тейешһең. Бөтә нәмәлә лә маһир булып булмай: яҡшы атай ҙа, яҡшы ир ҙә, шағир ҙә, хеҙмәткәр ҙә булыуы һәм ижади мөхиттән дә айырылмауы еңел түгел.*

## ШАҒИРҘЫ ТЫУҒАН ЕРЕ ШАҒИР ИТӘ

Мин эстән үҙемде гел яугир итеп тойҙом. Унынсы класты тамамлағансы, Матросов һымаҡ амбразура ҡаплап үлергә хыяллана торғайным. Бер мин генә түгел, тиңдәштәрем дә шундай рухта тәрбиәләнде. Шул осорҙоң һуғыш, Тыуған ил тураһындағы патриотик йырҙарын ҙур ғорурлыҡ тойғоһо менән йырлап үҫтек. Халыҡ йырҙарын ололар йырланы. Бала саҡта ла, үҫмер ҡорона ингәс тә, күпселек ваҡытыбыҙ тимерлектә һәм ат һарайында үтә торғайны. Ҡыҙған тимерҙе һандалға һалып туҡмау, шыжлатып һыуға һалыу үҙе бер ләззәт бирә ине. Ат һарайындағы ат тире еҫе һеңгән ҡайыштар һаман да күҙ алдында. Ауан ирҙәрҙең ат өйрәтеүен күҙәтеп йөрөп, аҙаҡ һигеҙенсе кластан үҙебеҙ ҙә тайҙарҙы менгегә өйрәтә башланыҡ. Үҙенә күрә бер тормош мәктәбе булған ул йылдар. Ул саҡ кешеләр ҙә нисектер яҡты, матур һымаҡ ине. Башҡортостандан ситтә булыуға ҡарамаҫтан, Ырымбур яҡтарында ла башҡорт халҡына ғына хас йолалар нык һаҡлана ине. Ул туй булһынмы, һалдатты әрмегә оҙатыу булһынмы - йолалар һәр саҡ ҙур дәрт менән ихлас күңелдән башҡарыла торғайны. Ҡоҙалар ҡаршылағанда утыҙ-ҡырҡ егеттең һыбай ҡаршыларға сығыуы үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләмәйме ни? Ул саҡтарҙа беҙҙә һабантуйҙар тыйылғайны. Шуғамылыр, туйҙар үҙе бер һабантуйға бәрәбәр үткәрелгәндер, тип уйлайым. Ғөмүмән, башҡорт халҡы үҙе шиғри күңелле халыҡ бит ул. Киске уйындарҙа дәртле бейеүҙәр, таҡмаҡ ҡойоуҙар үҙенән-үҙе тәбиғи килеп сыға торғайны. 60-сы йылдар аҙаҡтары булһа кәрәк, беҙҙең ауылға шағирҙар килеп китте. Мин аҙаҡ ҡына уларҙың Рәми Ғарипов менән Рауил Бикбаевтар булғанын белдем.

## КӨРӘШСЕНЕҢ КӨСӨ БИЛЕНДӘ, ШАҒИРҘЫҠЫ - ИЛЕНДӘ

Ниндәй этәргес булғандыр, белмәйем, тәүге шиғырымды яҙғыһын яҙғанымды иҫләйем. Ул мәл мин ҡартатайымдарҙың өйөндә инем. Яҙҙым да, шиғыр яҙылған ҡағыҙ киҫәген иҙән ярығына төшөрҙөм. Яҙ, ҡояш, тамсылар тамыуы тураһында ине ул. Аҙаҡ, күпмелер ваҡыт үткәс, уны алып уҡырмын, тип уйланым. Һуңғараҡ яҙған шиғырҙарымды "Башҡортостан ҡыҙы" журналына ебәрҙем. Бәлки үҙем дә йәшемде асыҡлап яҙмағанмындыр инде, миңә оло кеше кеүек күреп яҙылған хат килде. Машинкала баҫылған хатты уҡыу ышаныс өҫтәне микән, яҙыуымды дауам иттем. Бер көн атайым менән ауыл көтөүен алып ҡайтып килгәндә, бер төркөм тиҫтерҙәрем яр һалып, ҡаршы йүгереп килә. Ни булған икән тип, аптыраһам, ҡулдарында "Пионер" журналы. Ә унда минең шиғырҙар баҫылған. Малайҙарҙың шулай итеп ҙурлап ҡаршы алыуы миндә яңы көс уятты, һәләтемдең сәме уянды. Нимәһе ҡыҙыҡ: ул саҡта миңә башҡорттоң милли көрәше шиғыр яҙыуға ҡарағанда мөһимерәк һымаҡ ине. Белмәйем, үҙ көсөмдө һиҙҙем микән, бер ваҡытта ла ҡаршы яҡты тәү ынтылыштан ташламай торғайным. Минең өсөн иң ҡыҙығы бер-берендең көсөн һынау булды. Тәүәккәл булдыммы икән, еңеүҙе аҙаҡ сиккә ҡалдырыу ҡыҙығыраҡ була торғайны. Көрәш сәме, күрәһең, яйлап шиғриәт иленә алып инде.

## ШИҒЫР ЯҘЫУ - ҺӨНӘР ТҮГЕЛ

Шиғриәткә ҡарата фекерем бер нисә тапҡыр үҙгәрҙе. Әле лә, нимә ул шиғриәт, тиһәләр, аныҡ ҡына яуап та бирә алмаҫ инем. Шиғырҙы, ғәмәлдә, нисек яҙыла, шулай яҙа торғайным. Ихласлыҡ булһа, миңә шул етә. Әҙәбиәт теорияһына хас камиллыҡ, башҡалар теләгән фекер ҙә булмауы мөмкин - ихласлыҡ булһын! Шиғыр - ул сәнғәт икәнен аңлаған мәлем дә булды. Шиғыр ул йөрәктән булырға, төҙөк булырға мөмкин, әммә шул шиғырҙы яҙыусының халҡы бар икәнен онотorға ярамай. Мин - башҡорт икән, мин тик башҡорт шағиры булып

***✓Мин эстән үҙемде гел яугир итеп тойҙом. Унынсы класты тамамлағансы, Матросов һымаҡ амбразура ҡаплап үлергә хыяллана торғайным. Бер мин генә түгел, тиңдәштәрем дә шундай рухта тәрбиәләнде.***

ҡаласаҡмын. Образлылыҡҡа килгәндә, ул төрлө халыҡ шиғриәте өсөн дә уртаҡ. Образ фекер тыуҙыра, унан һуң ғына форма тыуа. Күпме шиғыр яҙҙым, һәр ваҡыт шикләндем - шиғыр булып формалашып еттеме ул? Күп осраҡта үҙемде тулыһынса асып һалыуҙан уңайһыҙландым да, буғай. Үҙемде-үҙем тыя килдем. Минең кисерештәрем башҡаларҙың кисереше менән тап киләме, тигән уй һәр саҡ борсоно. Ижад итә килә, хис бер тоҡанып, бер һүнеүен аңланым. Мөхәббәт хистәре шиғырҙарымда, бәлки, шуға ла һирәгерәктер. Бөҙрә һүҙҙәр менән сөсөләнеп яҙыр шиғырҙарым күп ине, ләкин мин уларҙан тыйыла алдым. Бәлки, ул саф тойғоларҙы һаҡлап алып ҡалыу кәрәк тә булғандыр, тормош бит, булдыра алманым.

ебәрҙем. Үҙем иһә БДУның филология факультетына уҡырға инергә хыяллана инем. Мәскәүҙән саҡырыу ҡағыҙы өйгә килгән, мин ул саҡ Өфөлә инем. Шуға күрә имтихандарға һуңлап барҙым. Магдалена Руденовна Саркисова тигән апай (ул һуңынан беҙҙе рус теленән уҡытты) ҡулдан етәкләп тигәндәй йөрөтөп, имтихандарҙы һуңлап булһа ла бирҙереп, уҡырға инергә ярҙам итте. Бәхтиһәң, бер урынға иллеләп кеше булған икән, аҙаҡ ҡына белдем. Хәмис Ягудин тигән егет: "Бында башҡорттарҙы яраталар, улар уҡыуға бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ керә", - тигәйне. Әйткәне юш килде. Миңә шул саҡ уңыш йылмайған, ә мин уның ниндәй ҙур уңыш булғанын аңламағанмын, кәрәк. Быныһы күпкә ауырыраҡ. Башҡа уҡыу йорттары менән сағыштырғанда, бында азатлыҡ тойғоһо көслө булды. Драматургтар, прозаиктар менән сағыштырғанда, шағирҙар төркөмөндәгеләрҙең бик һирәге генә аҙағына тиклем уҡып бөтөп, диплом алыуға ирешә торғайны.

### ӨЛӨШКӘ ТӨШКӘН КӨМӨШ

Шиғриәт тураһында бик күп һөйләргә була. Утыҙ йәштәргә тиклем үҙемде шағир тип тойоп йөрөнөм, шунан һуң уйлана башланым. Башта минең бар булмышым, йәшәйешем үҙем тыуҙырған шағир образына тура килә һымаҡ ине, бынан мин кинәнес таба инем. Аҙаҡ минең ға булмаһа, мин, бәлки, бөтөн ғаилә йөгөн ҡатынымдың иңенә һалып, үҙем күҙ алдына килтергән шағирлығымды дауам итер инем. Ысынлап та, шағир - ул сәхнә кешеһе йә трибун түгел. Әгәр ҙә минең ғаиләмдә тәртип юҡ икән, мин ни йөҙөм менән сәхнәгә, халыҡ алдына сығырға тейешмен. Шағир иң тәүҙә тирә яғында матурлыҡ тыуҙырған кеше булырға тейеш, ә инде үҙ ижадының биләмәһен киңәйтәм тип, башҡаларҙы ҡыҫырыҡларға тейеш түгел. Шағир - ул аҡыл өйрәтеүсе түгел, ә тормошта әҙ урын биләп, ҙур уйҙарҙы тормошҡа ашырыусы кеше булырға тейеш. Мәҫәлән, мин атай булараҡ, үҙ бурысымды аңлай башланым. Баланы үҫтереү, тәрбиәләү - уны урам буйына кеше алдына сығып етәкләп йөрөү түгел

# Ул йәшен атыуы, ташланыуы, балыҡ ҡарпыуы...

Күңелдә булмаған уфтаныуҙар менән, ах та-ух килеп, ҡолас йәйеп, кешегә хас булмаған әйберҙәр яҙып маташманым, үҙем булып ҡалырға, кеше булырға тырыштым. Халҡымдың үткәнен, бөгөнөн, киләсәген дөйөмләштереп уйлаған саҡта сөсөләнә алманым. Камиллыҡтың сиге юҡ: шиғыр яҙайым әле, тип ашыҡмайым, ваҡыты етһә, ул үҙе тыуа. Шиғыр яҙыу тәртибен белгән һәр кем бармаҡтан һурып булһа ла яҙа ала, әммә шиғыр яҙыу ғына шағирлыҡ түгел әле...

### ӘҘӘБИӘТ ИНСТИТУТЫ

"Пионер" журналында тәүге шиғырҙарым сыҡҡандан һуң Рауил ағай Бикбаев менән таныштым. Ул миңә Мәскәүҙәге Әҙәбиәт институтына уҡырға инергә тәҡдим итте. Әммә уның нимәнәндер һағайыуын, Мәскәүгә ебәргеһе килмәүен тойҙом. Быны мин башта аңламаным. Ысынлап та, Мәскәү мөхите, бигерәк тә Әҙәбиәт институтындағы мөнәсәбәт бөтөнләй башҡа төрлө. Баштан уҡ ундағы байрам кәйефе күҙгә ташланды. Рауил ағай, күрәһең, минең ана шул байрам кәйефенә күнегеп китеүемдән хафаланғандыр. Бөгөн килеп әҙәбиәт институты минең өсөн осраҡлы хәл һымаҡ ҡабул ителә, мин унда хыялланып, янып-теләп барманым. Әлбиттә, унда урамдан йыйып алмайҙар, башта әҙәби конкурсҡа руссаға ауҙарылған шиғырҙарымды шулай булырға тейеш кеүек ҡабул иткәнмен - бөтәһе лә тәбиғи күренгән. Өфөнән Рәми Ғариповтың шағир образы менән китһәм, Мәскәүгә барғас, Николай Рубцов тигән рус шағирының образы үрнәк булып торҙо. Ысын шағирҙар нәҡ шул икәү кеүек булырға тейеш, тип уйлай торғайным. Улар үҙҙәре тере саҡта уҡ классиктар кимәленә күтәрелгән шәхестәр ине. Ә инде Әҙәбиәт институты һәм уның дөйөм ятағы бөтөн СССР яҙыусыларын үҙенә тартып торған Мәккә кеүек булды. Ул осорҙағы ижади семинарҙарҙа һис ҡурҡмайынса ихлас һөйләшеүҙәр үткәрелә торғайны, хатта тыйылған әҙәбиәт тураһында ла хәбәрҙар инек. Ҙур шәхестәр менән аралашып, төрлө мәғлүмәт туплап, донъяның ни тиклем дә ҡатмарлы икәнен аңлай башланым. Ленинградтан, Свердловскийҙан, Вологданан килгән бик талантлы, рухлы, белемле урыҫ шағирҙары менән танышып, аралашып йәшәнем. Улар бик талантлы ине, ләкин уларҙың бер генә етешһеҙлеге булды - эсә торғайнылар... Рауил ағайҙың ниҙән һағайыуын шунда ғына аңланым. Әҙәбиәт институтында әҙәбиәтте яратҡан, әҙәби яҡтан мәғлүмәтле һәр кем уҡый ала, әммә бында беренсе урынға талант ҡуйыла. Бынан тыш, биш йыл буйы ана шул байрамса кәйефле әҙәбиәтселәр мөхитендә һауаланып, бөйөклөк менән ауырып китмәйенсә үткәрергә шағирлығым тирә-йүндәгеләргә, бигерәк тә яҡын кешеләремә ҡамасаулыҡ килтереүен һиҙҙем. Мин эгоист инем, шиғыр яҙыу, шиғриәт донъяһында йәшәү, үҙеңде шағир, ижад кешеһе итеп тойоу, дуҫтар менән аралашыу иң тәүге урында булды. Иң яуаплы эшем Шағир булыу ине, ә инде ғаилә, башҡаларҙың үҙемә ҡарата мөнәсәбәте мөһим булманы. Йәшерен-батырын түгел, өҫтәлдән араҡы өҙөлмәне, байрамса кәйеф өҫтөнлөк итте. Һәләтем асылған саҡтар ҙа, түбән тәгәрәгән саҡтар ҙа булды, холҡом үҙгәрә, үҙем-үҙемә ҡыҙыҡ булмай башланым. Йәмәғәт фекере, ғәҙәттә, үҙеңдән алда йөрөй бит ул. 1989 йылда Яҙыусылар Союзына алдылар. Ул саҡ бик юғары талаптар ҡуйыла ине. Бер оло ғына прозаик ағай: "Хисмәт, бына һин бер ерҙә лә оҙаҡ эшләй алмайһың. Кешенән аҡса алып тораһың да, бирмәй йөрөйһөң икән. Эсеп йөрөйһөң, ғаиләңде ҡарамайһың, тиҙәр. Һине Союзға алырғамы, юҡмы?" - тигән һорау ҡуйҙы. Шул саҡ ер ярығына төшөп киткәндәй булдым. Ул саҡ ҙур күсәк менән һуҡҡандай булһа ла, бөгөн мин Яныбай ағай Хамматовҡа бик рәхмәтлемен. Шул ваҡиғаһыҙ мин, бәлки, ... икәнен төшөндөм. Уларҙы Өфө кеүек мегаполиста башҡорт рухлы итеп тәрбиәләү ләззәт бирә башланы. Шағир булыуға ҡарағанда, күҙҙәреңә генә ҡарап торған балаларымдың өмөтөн аҡлау иң мөһим икәнен аңланым. Шул саҡ ҡына шағирлыҡ эйфорияһынан айныным, миңә ҡарағанда, минән бөйөк туған тел, күпкә юғары халҡым, минән аҡыллыраҡ, көслөрәк шағирҙар барлығын аңлау кимәленә еттем.

### ҠАБАТЛАНМАҪ МӘЛ

Мин шиғыр яҙыуҙың бөтөн серҙәрен белә торғайным. Мәҫәлән, берәй ағасҡамы, йә тәбиғәт күренешенә ҡарапмы, шиғыр яҙа алыу кимәленә күтәрелгәйнем. Әммә кисермәгән ғазаптарҙы кисергән булып ҡыланып, кеше аңламаҫ тойғоларға бирелеп, һағынмаған килеш һағынып, яратмаған көйө мөхәббәт тойғоһо кисереп ҡыланыуҙар буш нәмә икәнен аңланым. Бәлки прозаик кешегә яҙмай тороу килешеп етмәйҙер, сөнки был өлкә күп көс, ваҡыт һәм аҡыл талап иткән жанр. Ә бына шағирлыҡ йәшен атыуына бәрәбәр. Ул - һунарсы ҡоштоң үҙ ҡорбанына ташланыуына, балыҡ ҡарпыуына оҡшаш. Шиғыр яҙыу - һирәк килә торған ысын, ҡабатланмаҫ мәл.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Әңгәмә аҙағында Хисмәттән һуңғы яҙған шиғырын уҡыуын һораным. Ҡапыл уның күҙҙәрендә осҡон ҡабынды. Ул хискә бирелеп, шиғыр һөйләй башланы. Ҡулын ҡыҫтым. Ысын шиғырҙы, ысынлап та, көн һайын ишетеп булмай. Һәм улар көн һайын тыумай ҙа...**

*ҮӘТ ӘЙ!*

# ҺҮГЕНМӘ,
## фәрештәңде өркөтөрһөң

**Тел кешегә тәү сиратта аралашыу өсөн бирелгән. Тел арҡылы һөйләүсенең холоҡ үҙенсәлектәрен белеп була: аҡыллымы ул, хислеме, иғтибарлымы... Телен һүгенеү һүҙҙәре сыбарлаған кеше ниндәй була икән? Йәмғиәт был күренешкә шул тиклем өйрәнгән, хатта беҙ уны күп ваҡыт ишетмәйбеҙ, йәки ишетмәмешкә һалышабыҙ.**

Күптән түгел бер мәктәп ихатаһынан үтеп барышлай йәмһеҙ күренешкә шаһит булдым. Бармаҡ буйы ғына, күп булһа алты-ете йәштәрҙәге малайҙар, ике-өс ҡатлы итеп һүгенәләр. Иң аптырағаным шул: янында бер нисә уҡытыусы ла баҫып тора, әммә тыймай. "Уҡытыусылары ни ҡарай һуң!",- тип әсенеп уйлап та өлгөрмәнем, икенсе уй зиһенемде телеп үтте. Ул балаларҙың ата-әсәһе юҡмы ни һуң?

Иң мөһиме - йәмғиәттә был "ғәҙәт", ниңәлер, зыянһыҙ тип һанала шул. Була торған, ғәҙәти хәл итеп ҡабул итеүебеҙ үҙебеҙҙең башыбыҙға бәлә булып төштө лә инде: хәҙер үҫмерҙәр генә түгел, теле саҡ асыла башлаған, тәпәй баҫырға өйрәнгән сабыйҙар ҙа һүгенә!

Мәктәптәр, башҡа уҡыу йорттары был яман күренеш менән хәленән килгәнсе көрәшеп ҡараны ла, ҡул һелтәне, ахыры. Бына Сибайҙар һүгенеүгә ҡаршы тотош ҡала кимәлендә көрәшә башлаған. Былтыр, мәҫәлән, ҡалала "Һүгенеүгә ҡаршы Указ" да сыҡҡан. Бөтә мәктәптәргә, балалар баҡсаларына, предприятиеларға бюллетендәр таратылған урамдарҙа әр һүҙҙәренә ҡаршы плакаттар эленгән. Йәмғиәт урындарында һүгенеүсе кешеләр административ яуаплылыҡҡа тарттырылып, штраф түләргә мәжбүр булды.

Ҡайһы бер ғалимдар фекеренсә, кеше теле ярлы булғанға һүгенә. Йәнәһе, кире хис-тойғо шул һүгенеү аша тышҡа сыға. Бөгөнгө йәштәрҙең шатлыҡтарын да шул ысул аша белгертеүҙәрен нисек аңлатырға һуң юғиһә?

Гүзәл заттарҙың ауыҙынан әр һүҙҙәрен ишетеү бигерәк тә аянысла. Матур һүҙҙәр менән һөйгәнен, балаларын иркәләһен ине лә бит... Бик яман һүгенгән бер таныш ҡыҙым бар. Ҡолаҡтарҙы ҡыҙартҡансы һүгенә лә ҡуя бит! Уға ышанһаң, уларҙың ауылында йәштәр әр һүҙҙәре буйынса һүҙлек төҙөрлөк итеп һүгенә. Ә бына киләсәктә балаларының һүгенеүен теләмәй был ҡыҙ бала. "Һүгенеүҙе ташларға уйламайһыңмы?", - тиһәм, үҙе баш ҡаға. "Уның өсөн миңә бик ныҡ ғашиҡ булырға һәм һөйгәнемдең минең һүгенеүемә ҡаршы булыуы шарт", - ти танышым. Тик, минең уйымса, уға ундай кеше әле осрамаған. Йәки осраһа ла, ундай ҡыҙға яҡын килергә батырсылыҡ итмәйҙәр.

Һүгенеүҙең йәмғиәткә бик ҙур зыян килтереүе асыҡланғас, һүгенеүҙе тыйыу... кеше хоҡуҡтарын боҙоу түгелме икән, тигән фекер тыуҙы. Ә һүгенеүҙе ишетергә теләмәгән, ләкин уны көн дә урамда, эштә, мәктәптә, балалар баҡсаһында тыңларға мәжбүр булған кешенең хоҡуҡтары, тимәк, боҙолмай булып сыға? Башымда ҡайнаған һорауҙарға яуап табырға теләүем ҡайһы бер таныштарыма мөрәжәғәт итергә мәжбүр итте. Ҡолаҡ һалайыҡ.

● **Земфира ИЛЬЯСОВА, һатыусы:**

Бала саҡта бөтөнләй һүгенмәнем. Ғаиләмдә лә һүгенеү ғәҙәте юҡ ине. Үҫә төшкәс, дуҫтарым ыңғайына һүгенә башланым. Ә баҙарҙа һатыу иткәндә, һүгенмәү мөмкин түгел. Әммә был ғәҙәттән нисек тә булһа ҡотолорға ине. Сөнки малайым үҫеп килә. Уның ауыҙынан бысраҡ һүҙҙәр ишеткем килмәй.

● **Роберт ВӘЛИТОВ, студент:**

Бөтөнләй һүгенгәнем юҡ. Ғаиләлә лә бысраҡ һүҙҙәр ҡулланыу булманы. Сөнки ата-әсәйем үҙҙәре бик тәртипле кешеләр. Шуға күрә һүгенеүселәрҙе аңлай ҙа, ҡылыҡтарын ҡабул да итә алмайым. Минеңсә, улар тирә-йүндәге кешеләрҙе генә түгел, үҙҙәрен дә ихтирам итмәй.

● **Марат УСМАНОВ, пенсионер:**

Ҡасандан һүгенә башланым икән мин? Атай-әсәйем үҙҙәре һүгенә ине. Шуға күрә ул минең өсөн ғәҙәти хәл булды. Һүгенеү һүҙҙәренең ауыҙҙан сығыуын һиҙмәй ҙә ҡалам. Шул тиклем өйрәнгәнмен, ҡаныма һеңгән, күрәһең.

**Шулай итеп...**

**Ҡайһы саҡ аптырағандан уйлап ҡуям: һүгенеү һине тирә-йүндәге кешеләрҙең ишетмәүе арҡаһында килеп сыҡманымы икән? Һине ишетмәгәс, һүгенеп булһа ла иғтибарҙы үҙеңә тартаһың... Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?**

**Азамат САЛАУАТОВ.**

ЙОЛАҢДАН ЙӘН ТАП!

## Инеш һүҙ

**Башҡорт халҡы тормошонда, ғаилә йолалары менән бер рәттән, халыҡ байрамдары ла мөһим урын алып торған. Был байрамдар күмәк күңел асыу менән үтер булған. Уларҙа халыҡтың ауыҙ-тел, музыка, хореография, театр сәнғәте өлкәһендәге оҫталығы сағылыш тапҡан.**

**Башҡорттарҙың төп байрамдары яҙ-йәй баштарына тура килгән: был осор мөһим ваҡыт тип һаналған, сөнки тап ошо мәлдә киләһе уңышҡа нигеҙ һалынған, ырыу, ғаилә тормошоноң киләсәге, һаулығына юрау йолалары башҡарылған.**

**Йылға буйҙарында йәшәгән башҡорттарҙың байрам календарь циклы "Боҙ китеү байрамы" менән башланған. Был байрамға алдан уҡ әҙерләнә торған булғандар. Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында сепрәктән ҡурсаҡтар теккәндәр. Боҙ киткән саҡта (көндөҙ йәки төнөн)йәше-ҡарты, бала-сағаһы - бөтәһе лә йылға буйына йыйылған. Ҡатын-ҡыҙҙар боҙға ҡурсаҡтар, тәңкәләр ырғытып, теләктәр теләгән: "Беҙҙең ауырыуҙарҙы алып кит!**

**Беҙгә оҙон ғүмер бир!"**

**Ир-егеттәр, малайҙар боҙға ағастан юнып эшләнгән ат һындары, яндырылған һалам ырғытҡандар. "Бөтә булған ауырыуҙарҙы алып кит!" кеүек теләктәр теләнгән. Был йоланың мәғәнәһе кешеләрҙең ауырыу-һыҙланыуҙары, сир-сихырҙары боҙ һымаҡ емерелеп, һыу менән ағып китеп, юҡҡа сығыуына ышаныуҙы күрһәткән. Ауырыуҙар ҙа, аҡҡан һыуҙар кеүек, кире ҡайтмаҫҡа тейеш булған. Боҙ киткәс, бөтә халыҡ йырлап-бейеп күңел асҡан. Әгәр боҙ китеү төнгә тура килһә, байрам таңға тиклем дауам иткән. Йырбейеү, милли уйындар уйнау мотлаҡ тип һаналған.**

**"Ҡарға баҫҡан һау ҡалған" кеүек әйтемдәр нәҡ ошо хаҡта һөйләй ҙә инде. Шуның өсөн дә яҙғы байрамдар уйын-көлкө, йыр-бейеү менән тамамланған булған.**

# БОҘ КИТЕҮ БАЙРАМЫ

## Сценарий

**ҠАТНАШАЛАР:**
**Әбей**
**Ир**
**Егет**
**7-9 йәштәге малайҙар:**
**Арыҫлан**
**Юлай**
**10-15 йәштәге ҡыҙҙар:**
**Айбикә**
**Ынйы**
**Алтынай**
**Ҡарағаш**
**Таңһылыу**
**Сулпан**
**Йондоҙ**



**Ваҡиға башҡорттар Ислам диненә күскәнгә тиклем бара.**

**I КҮРЕНЕШ**

***Ҡыҙҙар урам буйлап йырлап китеп бара.***

**Сулпан:** Боҙ киткәндә ниндәй теләк теләйәсәкһең?

**Таңһылыу:** Инәйемдең һауығып, аяҡҡа баҫыуын теләйәсәкмен. Уның йөрәге ауырта бит.

**Айбикә:** Былтыр минең ҡустым атлай алмай ултырғас, мин Тәңренән уның атлап китеүен теләп, ҡурсаҡ ырғыттым. Оҙаҡламай, ул атлап китте.

**Таңһылыу:** Шулаймы? Бәлки, минең дә теләгем ҡабул булыр.

**Алтынай:** Ҡарағыҙ әле, минең ҡурсағым нисек булған?

**Йондоҙ:** Эй, ниндәй матур!

**Ынйы:** Һыуға ырғытыуы ла йәл быны.

**Алтынай:** Йәл түгел, мин бит уны Тәңренән һаулыҡ теләп ырғытам.

**Әбей:** Дөрөҫ әйтәһең, балам. Һаулыҡ - иң ҙур байлыҡ, тигән боронғолар. Бындай матур ҡурсаҡтарҙы әллә күпме тегергә була. Ә быныһы изге ниәт менән тегелгән, уны ҡалдырырға ярамай. Боҙ киткәндә, балалар, иң изге, иң ҙур теләкте бар күңелдән һорарға кәрәк. Шул теләк ҡабул була.

**Ҡарағаш:** Әйҙәгеҙ, боҙ ҡуҙғалғансы, Ынйыларға инеп ҡул эштәре менән булыша торайыҡ.

***Ҡатын-ҡыҙҙар өйгә инеп китә.***

**II КҮРЕНЕШ**

***Йылға буйына ир-егеттәр, малайҙар килә. Ир-егеттәр ағастан юнып ат эшләйҙәр.***

**Юлай:** Һауһың?

**Арыҫлан:** Һауһың!

**Юлай:** Ашыҡ уйнарға хәҙер генә киләм тигәйнең, ниңә һуңланың?

**Арыҫлан:** Инәйем, апайым боҙ китеүгә ҡурсаҡ тегә ине, мин уларҙың ҡайһы бер йомоштарын үтәнем, шуға ла һуңға ҡалдым.

**Юлай:** Ә миңә боҙ китһә, һөйөнсө әйтергә ҡуштылар.

**Арыҫлан:** Әйҙә, йәкәл һуға башлайыҡ.

**Юлай:** Иң беренсе шыбаға тотошайыҡ.

***Шыбаға тотошалар. Сәмләнеп ашыҡ уйнай башлайҙар.***

- Әпсен-төпсөн, кәкре китһен. Тфү-тфү-тфү...

- Һин үҙең кәкре...

- Мин ашыҡ эсенә ҡурғаш ҡойҙом. Улай төҙ тейә.

- Минең ҡулым өшөй башланы...Ҡаҙ тәпәйе һымаҡ булған.

- Ә минең ҡулыма себеш сыҡҡан...

- Минең әсәйем ҡаҙ майын һөртөп торғас, себештәрем кәмене.

-Әле ашығың ерҙән тейҙе. Улай иҫәпләнмәй. Әйҙә, яңынан ырғыт.

-И-и-и. Үҙе лә кәкере, ҡулы ла кәкере...

-Ҡай, бурысҡа биш ашыҡ биреп тор әле. Бөгөн инәйем тояҡ бешерергә ҡуйҙы. Иртәгә бурысты кире ҡайтарырым.

-Мә, ал. Минең өйҙә ашыҡ ярты тоҡ йыйылып китте.

**Юлай:** Ниндәйҙер шатырҙаған тауыш сыға...

**Арыҫлан:** Был боҙ шатырҙап ярыла, оҙаҡламай боҙ ҙа ҡуҙғала инде. Мин һөйөнсө һорарға йүгерҙем.

**Юлай:** Юҡ инде, мин барам. Һин теге йылды һөйөнсө һорап, түбәтәй алдың бит, минең дә яңы түбәтәй кейгем килә.

**Арыҫлан:** Ярай...

**Юлай өйгә йүгерә:** Һөйөнсө! Һөйөнсө! Һөйөнсөгә нимә бирәһегеҙ?

**Сулпан:** Сысҡан бото!

**Ынйы:** Үҙ ҡолағың үҙеңә булһын!

**Юлай:** Миңә түбәтәй кәрәк!

**Әбей:** Яңы түбәтәй тегеп ҡуйғайным, шуны бирермен. Йә, әйт һөйөнөслө хәбәрҙе.

**Юлай:** Боҙ китә!

**Әбей:** Бик яҡшы. Теккән ҡурсаҡтарҙы алып, һыу буйына барайыҡ. Тик ярға ныҡ яҡынламағыҙ, һыуға төшөп ҡуймағыҙ.

**III КҮРЕНЕШ**

***Бөтәһе лә йылға буйына йыйыла. Әҙерләгән ҡурсаҡтарҙы, ағас аттарҙы, яндырылған һаламдарҙы боҙға ырғытып, теләк теләйҙәр.***

**Ир кеше:** Тай хәлен ат белмәй,
Ауырыу хәлен ят белмәй.
Иҫән булһын был башым,
Тағы үҫер был сәсем.
(Ағас атты боҙға ырғыта).

**Арыҫлан:** Атһыҙ ауырыуымдың аты ҡороһон!
*(Янған һаламды боҙға ырғыта).*

**Егет:** Буҙ атым боҙға ятың,
Ауырыуымды ал да боҙға боҫ.
*(Ағас атты боҙға ырғыта).*

**Юлай:** Йөрәгем йүгер,
Ҡара ҡаным кит, ҡыҙыл ҡаным ҡал!
*(Янған һаламды боҙға ырғыта).*

**Ынйы:** Бауырымдың ауырыуы ҡарға күсһен,
Ҡарҙан боҙға, боҙҙан һыуға.
Һыу ағыҙып кит, кире юлды онот!
*(Ҡурсаҡты боҙға ырғыта).*

**Айбикә:**
Күҙем түҙең,
Һыуыҡҡа һауыҡ!
Боҙ менән күҙемдең ағы ирешен!
Күҙ ауырыуы төҙәлһен!
*(Боҙға тәңкәләр ырғыта).*

**Алтынай:**
Аяғым - таяғым,
Таяғымды һыуға тығайым...
*(Боҙға таяҡ ырғыта).*

**Таңһылыу:**
Инәйемдең йөрәге ойомаһын да,
Сәсмәһен дә, ауыртмаһын да.
Һауыҡ инәкәйем, һауыҡ!
*(Ҡурсаҡты боҙға ырғыта).*

**Әбей:**
Башың ауыртһа, яулыҡ эсендә булһын,
Беләгең ауыртһа,ең эсендә булһын!
*(Ҡурсаҡты боҙға ырғыта).*

**Ҡарағаш:** Килер ҡаза шуның менән бөтһөн!
*(Боҙға тәңкәләр ырғыта).*

***Бөтәһе лә йырҙар йырлап, "Йөҙөк һалыу", "Йәшерәм яулыҡ" уйындарын уйнай башлай. Һуңынан теҙелеп тороп, ҡулға-ҡул тотоношалар, теләк әйтәләр.***

**Ынйы:** Байлыҡ - бер айлыҡ,
Һаулыҡ - ҙур байлыҡ.

**Йондоҙ:** Йән рәхәте тән менән!

**Алтынай:** Аяғы менән киткән ҡайта,
Башы менән киткән ҡайтмай.

**Айбикә:** Ҡайһы ерең ауыртһа,
Йәнең шул ерҙә.

**Әбей:** Ауырыу ҡыйын,
Ауырыуҙы ҡарау унан да ҡыйын.

**Сулпан:** Аш - ашау менән түгел,
Аш булып үтеү менән.

**Юлай:** Йәшел сирәм сир ҡыуыр.

**Ҡарағаш:** Һәр ауырыуҙың үҙ име бар.

**Таңһылыу:** Һәр дарыу, саманан уҙһа - ағыу.

**Арыҫлан:** Эттең тынынан,
Бесәйҙең йөнөнән һаҡлан.

**Егет:** Тәңре көнө тарынан да күп.

**Ир:** Паклыҡ һөйгән һау булыр.

**Бөтәһе лә:** Һау булайыҡ!

**ШАРШАУ.**

**Фәнүр ШАҺИЕВ,**
**Гөлшат ШАҺИЕВА.**
Учалы районы,
Ҡорама ауылы.

✓ ***Хаталарын танырға теләмәгән өсөн дә иң яҡшы ниәттәре селпәрәмә килеп, ярты юлда харап булған бөйөк империяларҙың меҫкен яҙмышы билдәле. "Тәкәбберлек алдан йөрөһә, оят менән бәлә эйәрә" - ти француз халҡы.***

*ҺАБАҠТАР*

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҠАТМАРЛЫ ФЕКЕРҘӘРЕ

## Хатаһын таныған - аҡыллы, төҙәткән - ҡыйыу

**Әгәр һәр беребеҙ яҡты донъяға әҙәм сүрәтендә генә түгел, әҙәмсә йәшәр өсөн тыуғанлығын аңлаһа, ғәзиз ғүмерен намыҫлы йәшәһә, вазифаларын инсафлы, бурыстарын даими үтәһә, тормоштағы хәл-ваҡиғаларға "миңә ҡағыла" йәки "ҡағылмай" тип, ике төрлө күҙлектән ҡарамаһа, хаталарыбыҙ күп һәм үкенесле булмаҫ ине. Ҡапыл ҡарауға, ул хәтлем иҫ китерлек талаптар ҙа юҡ кеүек. Көндәлек тормошта кеше икәнеңде онотмай, туғандарың, яҡындарың, таныштарың алдында ҡәҙимге яуаплылығың бар икәнде иҫләп, бер-береңә кешелекле булып йәшәй белеү ҙә етә.**

Донъя матур, йәшәү рәхәт, тип ҡысҡырыусылар ишәйеп бара. Донъя үҙенән-үҙе бер заман да матур булмаған. Уны матурлар өсөн күп көс, тир, хатта ҡан түгергә тура килгән мәлдәр ҙә булған. Ҡайһы бер татыулыҡҡа ҡытлыҡ, хәүефле осорҙар кисергәндә, мөхитте, донъяны матурламағанда ла, исмаһам, тупаҫ эшләп, бысратмай йәшәү ҙур өлгәш һыналған. Шул сиктәрҙән тайпылмағанға күрә күп халыҡтар, күп илдәр үҙҙәрен, телдәрен, үҙенсәлектәрен һаҡлап алып ҡала алған. Хаталарҙы таныу, хаталар өҫтөндә эшләү оят түгел! Тәкәбберлек, мәүешлек - оят! Хаталарын танырға, төҙәтергә теләмәгән өсөн дә, иң яҡшы ниәттәре селпәрәмә килеп, ярты юлда харап булған бөйөк империяларҙың меҫкен яҙмышы билдәле. "Тәкәбберлек алдан йөрөһә, оят менән бәлә эйәрә" - тип әйтә француз халҡы.

Бөгөн беҙҙең йәмғиәтте борсоған мәсьәләләрҙең береһе - телебеҙҙе боҙған хаталарҙы танып, төҙәтеү. Туған телебеҙҙе боҙоп һөйләшәбеҙ, һүҙҙәрҙе боҙоп яҙабыҙ. Иң ҡыҙғанысы, бер ҡурҡынысы юҡ, тип, ғәҙәттәгесә, ҡоро һүҙгә әйләндереп, телгә еңел ҡарау көсәйеп бара. Йәнәһе ҡәҙимге һөйләшәбеҙ, аңлашабыҙ, тағы нимә кәрәк? Әгәр шул ҡараш өҫтөнлөк ала икән, телебеҙҙең харап булыуы шикһеҙ. Әллә күпме һөйләһәк тә, сауҙа үҙәктәре, магазин, киосктар атамаһында, ауылдар, ер-һыу атамалары күрһәткестәрендә хаталар һаман да бихисап.

Ярай, Пугачев ихтилалынан һуң Әбей батша, башҡорттарҙы иҫкә төшөрмәһендәр, башҡорт халҡы бар икәнен дә онотһондар өсөн, Яйыҡты Урал тип атарға бойорған, ти. Унан һуң 230 йыл инде башҡорттар ихтилал түгел, башын да күтәрмәй йәшәй. Шулай булғас, ниңә һуң һаман ер-һыу атамаларыбыҙҙы боҙоуға юл ҡуябыҙ?! Башҡа телдәрҙең бер һүҙен дә боҙоп һөйләшмәйбеҙ бит. Үҙебеҙҙекенә битарафбыҙмы? Темәс, Мораҡ, Аҫҡар, Собханғол, Ағиҙел, Һаҡмар, Дим исемдәрен урыҫса уҡып, әйтеүе ҡыйын, имеш. Һылтау! Башҡорт теленең 9 хәрефен өҫтәп өйрәнерлек далан юҡлыҡтан түгел, теләк юҡ! Теләк булғанда, беҙгә башҡорт хәрефтәрен түгел, бөтөнләй ят ауазлы, өнлө ҡытай телен дә өйрәнеп һөйләшергә була. Үҙебеҙ йәшәгән төйәктә: ауылда, ҡалала, урамда, эштә, өйҙә тел боҙоуға тыныс ҡараһаҡ, йәки бөтөнләй битараф булһаҡ, телебеҙҙе һаҡлайыҡ, тип, бейек-бейек трибуналарҙан ҡысҡырыуҙан ни фәтеүә? Әллә "ялғыш", әллә яңылыш хата эшләүселәрҙе ваҡытында төҙәтергә, хата яһамаҫҡа өйрәтергә, яңылышлыҡтан тыйылмаһа, хатта яуапҡа тарттырырға теләк булһа, мөмкинселек бар, ул - һәр төбәктә ойошторолған йәмәғәт комиссиялары (административ комиссиялар).

Беҙ, аҫаба башҡорттар, телебеҙ, яҙмабыҙ, йола, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе һаҡлауҙа үрнәк һәм өлгө була алмаһаҡ, ул тоғролоҡто кемдән көтә һәм талап итә алабыҙ һуң? Башҡортостан райондары ойошторолоуға "түңәрәк" йыл тулыу айҡанлы һәм башҡа байтаҡ матур саралар үткәрелеп тора. Ҡайһылары ысын күңелдән, халыҡсан булһа, бәғзеләре иҫәп өсөн генә үтәлер. Кемдәрҙер ойоштороу сараларында йөкмәтелгән бурыҫын вазифаһына күрә үтәһә, кемдәрҙер выжданы ҡушыуы буйынса ысын күңелдән ҡатнаша, кемдәрҙер күҙ буяу өсөн генә "ең һыҙғанып" йөрөй. Шулай тип иҫәпләргә кире ҡаҡмаҫлыҡ дәлилдәр һәм сәбәп тә бар. Йомортҡанан йөй эҙләмәгәнемде раҫлар өсөн бер-ике генә миҫал килтерәм. Төрлө тантаналы сараларға бағышлап әҙерләнгән һәм ҡунаҡтарға бүләк ителгән сувенир, буклет, плакаттарҙа Башҡортостан байрағы урынына Африкалағы Сьерра-Лионе (башҡалаһы - Фритаун) иленең флагы йыш күҙгә ташлана. Ғәжәп! Әгәр ҙә мәгәр "заман еле"нән байраҡ төҫтәренең аҫты өҫкә килеп түңкәрелә, тиһәләр, ҡурайҙың тажын да түңкәреп төшөрөргә кәрәк ине. Хәҙер ҡайҙа ҡарама - урамда, телеэкранда, гәзит-журналда, һәр бер өҫтәлдә тиерлек илебеҙҙең тамғалары (символдары) күҙ алдында ята. Әллә бөгөн йөкмәтелгән эшенә, бурысына, вазифаһына намыҫлы булмаһа ла, яуаплы ҡараған кешеләр юҡ тамы ни? Ә ырыу тамғаһына төшөрөлгән һап-һары яллы, һап-һары ҡойороҡло сем ҡыҙыл йәки йәшел төҫтәге ат - маңҡортлоҡҡа ишара ахыры. Башҡорт борондан һын төшөрөүҙе хупламаған, төшөргән хәлдә лә, тәбиғәт ысынбарлыҡты һүрәттә кәүҙәләндергәндә Хоҙай ҡушмаған төҫтәргә буяп, яһалмалыҡ, шапырыныуҙар менән мауыҡмаған.

Яҡшы дан ята, яманы сабып йөрөй! Һүҙ, яҙыуыбыҙға иғтибарлыраҡ булһаҡ ине. Төркмән халҡы: "Ике тапҡыр хур булыу ҡыйыуҙы ла үлтерә" - тип юҡҡа ғына әйтмәгәндер. Үҙ хаталарыбыҙҙы төҙәтеп, үҙ йола, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе тотоп йәшәмәһәк, башҡаларҙыҡына буйһонорға тура килер. Шигем юҡ, минең һымаҡ, донъя ҡатмарлы, болғансыҡ, холоҡһоҙ, тигәндәрҙе яратмайҙар. Мыжый, ҡара яға, зарлана тиҙәр. Ә үҙҙәре хатаны төпкәрәк йәшереп, күҙ яҙлыҡтырырға тырышалар, ҡайһылары хаталар күбәйгән һайын, аҫтыртын сәпәкәй итеп ултыра. Шигем юҡ! Улар өсөн етешһеҙлеккә төртөп күрһәтеүсе - осаһына ҡаҙалған шырау кеүек. Борондан заманаһының нишаналары менән ыҙғышҡан зыялыларҙы яратмай ғына түгел, аҫҡандар, утҡа яҡҡандар. Яҡшылыҡ хаҡына ҡорбан булғандар халыҡ иҫендә. Яттың күҙгә төртөп мыҫҡыл итеүенә, ғәрлегенә түҙгәндәр йәшәһен мәүешлектә. Ниңә бөгөн әүлиәләребеҙҙе, ишан, хәҙрәттәребеҙҙе йыш иҫкә төшөрә башланыҡ? Уларға ҡаршы замандаштары ҡылған хилафлыҡты танып төҙәтер өсөн түгелме? Уларҙың әрүахтары алдында баш эйеп, затыбыҙ, намыҫыбыҙҙы аҡлар өсөн түгелме? Кем әүлиә, кем гонаһһыҙ был донъяла? Икмәк тотоп, кем шулайтып әйтә ала? "Үҙ ғәйебеңде үҙең әйтеү дошмандың ауыҙын яба", тигән әйтемде иҫтә тотоп, яҙыҡтарҙан тыйылып, яңылыштарҙы төҙәтерлек хәлгә өлгәшһәк, хур булмаҫбыҙ. Халҡыбыҙ зирәк, һәләтле. Тоҡомобоҙ ырыҫлы, затлы башҡорт икәнен онотмай, шул дәрәжәлә лайыҡлы йәшәйбеҙ тиһәк, нык тырышып, хаталар өҫтөндә даими эшләргә кәрәк. Уның өсөн ихтыяр, теләк, үҙеңде һәм халҡыңды хөрмәт итеү зарур.

Беҙ, башҡорттар, үҙебеҙ ҡәҙерләмәгәнгә күрә, башҡаларҙа ла телебеҙгә, яҙмабыҙға тиҫкәре ҡараш тәрбиәләнек. Хәҙер тағы ҡәтғи саралар күрмәй, һүҙ ҡуйыртһаҡ, бер яҡшы һөҙөмтәгә лә өлгәшә алмаясаҡбыҙ. Әйләнә лә бер балыҡ башын сәйнәгәнсә, тағы бер тапҡыр хөкүмәттең махсус ҡарарын уҡып сығып, яуаплы кеше тәғәйенләп, ваҡыты еткәс, һығымталар яһап, етди баһа биргәндә генә ыңғай уңышҡа өлгәшербеҙ. Ҡунаҡтың күҙе үткер, ҡолағы отҡор, тигәнде онотмай, ҡунаҡтар ҡаршылар алдынан ошо сараны атҡарғанда, үҙебеҙҙе хаталарҙан һәм уңайһыҙ хәлдәрҙән ҡурсалар, халҡыбыҙҙың, илебеҙҙең дәрәжәһен һаҡлар инек. Ә былай, хаталар тураһындағы һүҙҙе гәзиттән гәзиткә, хәбәрҙән хәбәргә күсереүҙән зыяндан башҡа файҙа юҡ! Ошо турала яҙған, һөйләгән тел белгестәре, фән әһелдәре, арҙаҡлы шәхестәрҙән ҡала иң һуңғы димсе мин (ябай башҡорт балаһы) булһам ярар ине.

**Алҡыштарҙан тормай донъя - ҡарғыштар ҙа унда.**
**Ҡылғанына яуаплылыҡ ята әҙәм балаһында!..**



**Урал МОСТАФИН.**

**(Дауамы. Башы 14-15-се һандарҙа).**

*ЗАУЫҠ*



**Рита ФӘТҠУЛЛИНА - Ишембай районының Маҡар ауылы ҡыҙы. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын тамамлаған. Бөгөн ул Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһында әҙәбиәт уҡытыусыһы, аспирантурала уҡый. Быйыл Рита Бәләбәй ҡалаһында үткән "Илһам шишмәләре-2007" шиғриәт фестивалендә Гран-при яуланы. Тиҙҙән Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә уның шиғри йыйынтығы донъя күрәсәк.**

# ҠОЯШ БУЛЫП СӘСТӘРЕҢДӘН ҮБЕР,

## Ысыҡ булып күҙҙәреңдән тамыр...

### Йыһан, Ер һәм беҙ

Ерем, күкрәгеңә башым
һалайымсы,
Тыңлайымсы йөрәк
тибешең.
Йөрәк ҡағышыңдан
табайымсы
Йәнем ишен.

Йәрем, күкрәгеңә башым
һалайымсы,
Тыңлайымсы йөрәк
тибешең.
Йөрәк ҡағышыңда тояйымсы
Ерем әйләнешен.

### Минең йырым

Минең йырым һине
һағыныр ҙа,
Тыуыр тағы таңғы шәфәк
булып.
Күк йөҙөнә һөйөү һүҙен
яҙыр,
Балҡып яныр алһыу нурға
тулып.

Моңо менән ҡабат алып
ҡайтыр
Икәү генә ҡаршылаған
таңды.
Ҡояш булып сәстәреңдән
үбер,
Ысыҡ булып күҙҙәреңдән
тамыр.

Минең йырым һине һағынған
ул,
Һағышынан шундай ташҡан
мәле.
Көноҙоно һине оҙатһын ул,
Таң сафлығын һаҡлар өсөн.
Йәме?

Кис йөҙөндә шәфәк нуры
менән
Офоҡтарҙы моңға күмһә
йырым,
Хушлашыуы, тиеп, уйлай
күрмә, -
Ул төшөңә һинең сәфәр
ҡылыр.

... Төштәреңә инер илаһиә
Минең һыным булып.
Елкендерер татлы ымы,
Серле йырым булыр...

Минең йырым һине
һағыныр ул...
Өн-төш сиге уға бикле түгел.
Таң нурында наҙлап уятыр
йыр -
Һөйөү бит ул,
Һөйөү сикле түгел...

### "Кәрәкле-кәрәкмәҫ" шәлкеме

*(Мыйыҡ аша йылмайыу)*

**Вакуум**
Күңелемә оялаған
Вакуумдан ялҡтым.
Ҡайҙан тапмаҡ кәрәк икән
Һағыныу объектын?

**Нәфсе**
"Ҡайҙа икән минең ҡапҡас?" -
Тип илай икән силәк.
Ә ҡапҡасы яр һалған, ти:
"Миңә цистерна кәрәк!"

**Ауылды һағынғанда**
Асфальтты зар илатҡан
Үксәләрҙән киткән һуш -
Газон буйлап сабыр инем,
Кәрәк резинкә калуш.

**Ҡартлыҡ иҫкә төшкәндә**
Зифа буйлы ҡыҙмын әле -
Бер маҡтанып ҡалайым.
(Оҙон әбей кәрәкмәй, тип
Әйтмәҫ микән бабайым?)

**Бәпес кәрәк!**
-Ҡауҙы менән килешмәһәң,
Кәбеҫтәнән эҙләрһең!
-Ярай, йәнем, иҫке ысул
Эшкинмәйҙер, күрәһең.

**Һағыныу йыры**
Баласағымды һағындым,
Үткәндәргә ҡайтайым.
Кем бар унда? Лупа кәрәк,-
Үҙемде танымайым!

**"Энер Джайзер"**
Ҡуян менән ҡыуышҡайныҡ,
Ә ул сыҡты ла һыҙҙы.
Алмаштырырға кәрәктер
Минең дә батарейҙы.

**Патриот**
Кәрәкмәй бананлы көньяҡ,
Көртмәлеле төньяғың.
Мин ауылым аҡланында
Еләк ашап туйманым.

**✓ Йыл һайын Рәсәйҙә саманан тыш хәмер эсеү сәбәпле 900 меңгә яҡын кеше вафат була. Һуңғы ун йылда тыумыштан төрлө сирҙәр, етешһеҙлектәр менән тыуған 97,9 процент бала иҫерек ата-әсәнән тыуған.**



## ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРЕНӘН

**✓Рәсәй үҙ демографияһына ҡул һелтәне.**

Бөгөнгө көндә демографик ситуацияға ентекле анализ яһау мөмкин түгел, сөнки 1997 йылдан башлап әлегәсә тейешле статистик мәғлүмәттәр йыйылмаған. Рәсәйҙең 79 төбәгендә тыуым кәмегән, алтмышында үлем осраҡтары артҡан. Былтыр Рәсәйҙә вафат булыусылар һаны 2005 йылға ҡарағанда 18 600 кешегә, ә яңы тыуғандарҙың һаны 36 300 кешегә кәмегән. Күп төрлө фараздар буйынса, 2010 йылға тиклем тыуым һаны даими артырға тейеш ине, ләкин улар тормошҡа ашманы.

# КҮРҺӘТЕГЕҘ ӘЛЕ ИЛДЕ,

## йәки Рәсәй тураһында ни беләбеҙ?

✓Рәсәйҙә ирҙәрҙең уртаса ғүмер оҙайлығы 59, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы 72-гә тиң. 2001 йылда уҡ Рәсәй үҙ халҡының ғүмер оҙайлығы буйынса донъяла 100-сө урынды биләй ине. Беҙҙең ирҙәр башҡа ил ирҙәренә ҡарағанда 15-19 йәшкә, ә ҡатындар 7-12 йылға иртәрәк яҡты донъя менән хушлаша. Бөгөн иһә беҙ ғүмер оҙайлығы буйынса донъяла 122-се урындабыҙ. Беҙҙән Гайана менән Төньяҡ Корея ғына ҡалыша.

✓Минут һайын Рәсәйҙә 5 кеше вафат була, ни бары 3 кеше тыуа. Шулай итеп, Рәсәйҙә үлем тыуымды уртаса 1,8 тапҡырға, ә ҡайһы бер төбәктәрҙә хатта 2-3 тапҡырға уҙҙыра. Илебеҙ йыл һайын халыҡ иҫәбе буйынса... Псков өлкәһендә йәшәүселәр, Карелия кеүек республика йәки Краснодар кеүек ҙур ҡалала йәшәүселәр һанындай кешеһен юғалта. Һуңғы ун йыл эсендә Алыҫ Көнсығыш халҡы 40 процентҡа һәм Алыҫ Себер халҡы 60 процентҡа кәмегән. Һуңғы бер нисә йыл эсендә генә Себерҙә 11 000 ауыл һәм 290 ҡала юҡҡа сыҡҡан.

✓Әгәр ҙә ил иҡтисады бөгөнгө кеүек сеймал һатыуға ғына нигеҙләнһә, илгә 70-80 миллион кеше бөтөнләй кәрәкмәйәсәк.

Рәсәй халҡы ҡартая: ил халҡының уртаса йәше - 37,7 йәш. 16 йәшкә тиклемге балалар һаны ҡапыл кәмене. Ябай Рәсәй ғаиләһе бөгөн 2-3 кешенән генә тора. Халыҡ иҫәбенең ҡапыл артыуына ышаныу урынһыҙ, сөнки аборттар һаны 8 миллионға тиклем барып етә. Йылына 402 000 бала тыуа.

✓Ҡыҙыҡ деталь: Рәсәйҙә кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙҙар өйләнгән ирҙәргә ҡарағанда 65 меңгә күберәк.

Рәсәйҙә рәсми теркәлгән 2 миллион етем иҫәптә тора.

Балаларҙың 30 проценты тулы булмаған ғаиләлә тыуа. Ун йыл элек иһә тулы булмаған ғаиләлә 14,6 проценты балалар донъяға килгән, 2003 йылда иһә был күрһәткес ике тапҡырға артҡан. 1992 йылдан алып ил халҡы 9 миллионға кәмегән. Эшләй алырлыҡ 1000 кешегә бер ниндәй эш башҡармаған 600 кеше тура килә.

✓Рәсәйҙә йылына 2 500 000 кеше үлә. Йөрәк һәм ҡан системаһы ауырыуҙары ғына 1 400 000 кешене теге донъяға алып китә. Тәмәке тартыуҙан иһә йыл һайын 270 000 инсан вафат була.

Йыл һайын Рәсәйҙә саманан тыш хәмер эсеү сәбәпле 900 меңгә яҡын кеше вафат була. Һуңғы ун йыл эсендә тыумыштан төрлө сирҙәр һәм етешһеҙлектәр менән тыуған 97,9 процент бала иҫерек ата-әсәнән тыуған.

Әгәр ҙә 1997 йылда Рәсәйҙә кеше башына уртаса 17 литр һыра эселһә, бөгөн бер кешегә уртаса 61 литр һыра тура килә.

Рәсәйҙә 26 000 бала ун йәшкә тиклем йәшәп өлгөрмәй, көн һайын 50 сабый үлә. Уларҙың 70 процентының бала табыу йорттарында ғүмере өҙөлә.

Рәсәйҙә йылына 58 000 кеше үҙ-үҙенә ҡул һала, 40 000 кеше үлтерелә. Үҙ теләге менән был фани донъянан китеүселәр яҙ миҙгелендә ҡапыл арта.

**(Дауамы бар).**

## ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА

# ЯРАЛҒЫ ЙӘНЕН ҠЫЙЫП...



## гонаһҡа бата гүзәл зат

**- Эльвира аборт эшләтергә йыйына.**

**- Нисек инде? Һуң дүрт йыл буйы бала таба алмай зарыҡтылар түгелме?**

**- Зарыҡтылар ҙа ул... Эльвираға ярты йылдан яҡшы эш урыны вәғәҙәләйҙәр, ә ауырлы икәнен белһәләр, алмаясаҡтар. Ире лә: "Ашыҡмай торайыҡ, йәшәргә лә урыныбыҙ юҡ, хәлдән килмәҫ әлегә", тигән. Эльвира бит иренең һүҙенән сыҡмай. Хәйер, беҙҙең, ҡатын-ҡыҙҙың, шундай саҡта иргә таянғыбыҙ, йыуаныс, кәңәш тапҡыбыҙ килә инде...**

**- "Бала кәрәк", тип, Эльвиранан алда ире тел сарлай ине лә. Хәҙер килеп, торлаҡ юҡлығына һылтанамы? Кемгә әле өйләнгәс тә фатир әҙерләп ҡуйғандар? Улай булғас, әйҙә, фатир алғас, пенсияға сыҡҡас бала табайыҡ. Шундай уҡ сәбәп менән тәүге балаһына аборт яһатҡан апаһын күрмәйме икән Эльвира? Һигеҙ йыл буйы бала таба алмай бит. Йөрөмәгән ере, тапамаған балнис тупһаһы ҡалманы.**

**- Әхирәт, әйҙә, ошо хаҡта Эльвираның үҙе менән һөйләшәйек. Уның әле нык икеләнгән, кәңәшкә, аңлауға мохтаж сағы. Был йүнәлештә күп эшләгән, күпте белгән берәй врач табайыҡ та, Эльвираны шунда алып барайыҡ. Үҙебеҙ өсөн дә файҙа булыр...**

**Шулай итеп, врач-гинеколог менән был һөйләшеүҙе аҡ ҡағыҙға төшөрөп, гәзит уҡыусылар иғтибарына ла тәҡдим итергә булдыҡ. Һүҙ F.F. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының гинекология бүлеге табибы, БР-ның һаулыҡ һаҡлау алдынғыһы Фәнисә Абдулла ҡыҙы ШӘҮӘЛИЕВАға.**

● Иң күп аборт эшләтеүселәр - 20 йәштән 30 йәшкәсә ҡыҙ-ҡатындар. Ун дүрт, ун бишлек йәшлек үсмерҙәр араһында ла аборт яһатыусылар һаны арта. Рәсәйҙә, законға ярашлы, ун ике аҙнаға тиклемге яралғыһына ҡатын-ҡыҙ үҙ теләге менән аборт эшләтә ала. Ун ике аҙнанан үтһә, был операция тыйыла. Социаль күрһәткестәр нигеҙендә, мәҫәлән, ире хөкөм ителгән осраҡта, көсләү һөҙөмтәһендә ауырға ҡалғанда, йәки үҙе тикшереү аҫтында булған ваҡытта егерме ике аҙнанан һуң да аборт эшләргә мөмкин. Шулай уҡ медицина күрһәткесе буйынса, йәғни йә ҡатындың, йә яралғының сәләмәтлегенә хәүеф янағанда, ҡурҡыныс сирҙәр күҙәтелгән осраҡта егерме ике, егерме һигеҙ аҙнаға тиклем аборт эшләтеү ҡаралған. Диагнозды бер генә табип ҡуймай. Ул комиссия тикшереүе аша билдәләнергә тейеш. Ун ике аҙнаға тиклем үк сирҙең күрһәткестәре ультратауыш тикшереүе ярҙамында асыҡланырға мөмкин.

**▶ Күберәк ниндәй сәбәп абортҡа этәрә?**

● Сәбәптәр төрлө. Аборт яһатыусы ҡыҙҙарҙың күбеһе кейәүгә сыҡмаған, улар йә ата-әсәһенән ҡурҡа, йә уҡыуын тамамлау яғын уйлай. Ә ғаиләлеләр матди етешһеҙлек, торлаҡ булмау проблемаһы арҡаһында бала табырға теләмәй. Ошо сәбәп менән тәүге балаһына уҡ аборт эшләтеүсе йәш ғаиләләр һаны артыуы бигерәк тә аяныслы.

**▶ Аборттың организм өсөн зыяны?**

● Балаға уҙғандың тәүге көндәренән үк организм бик ҙур үҙгәрештәр кисерә. Ул иң яуаплы процесҡа - кеше тыуҙырыуға әҙерләнә. Ауырға уҙған организм төрлө тышҡы йоғонтоларҙан һаҡланыуға, гормональ үҙгәрештәргә, психологик кисерештәргә үҙ-үҙен көйләй башлай. Аборт яһатыу - шәп тиҙлектә елдергән поезды ҡапыл туҡтатыуға тиң. Аборттан һуң аналыҡ ялҡынһынырға, күрем циклы боҙолоп, оҙаҡҡа һуҙылырға, йә ҡыҫҡарырға, йә ауыртыныуҙар менән үтергә мөмкин. Үсмерҙәр организмы өсөн аборт яһатыу икеләтә зыянлы. Үҫеш процесында булған организм көслө һынылыш кисерә, фажиғәле эҙемтәләр йышыраҡ ошо осорға тап килә. Аборт эшләтеүсе һәр өсөнсө ҡатындың тиерлек бала табыуҙан мәхрүм ҡалыуы ихтимал, хатта ялҡынһыныу процесы үткәндән һуң да ҡатын-ҡыҙға ошондай ҡурҡыныс янай. Тағы ла балаға уҙған осраҡта ла уның репродуктив ағзалар системаһы ныҡ ҡаҡшай һәм сәләмәт булмаған бала тыуа.

Яңыраҡ ҡына беҙҙә бер ҡатын дауаланып ятты. Кейәүгә сыҡҡанға тиклем өс тапҡыр аборт яһатҡан булған. Сираттағы ауырын да һаҡлап ҡалдыра алманыҡ. Гормональ өҙөклөк барлыҡҡа килгән. Ул ауырға ҡалыуын ҡала ала, әммә гел төшөп торасаҡ. "Бала тапҡым килә", тип илап ебәргәс, "Тәүге балаңа аборт яһатырға ярамағанлығын белмәнеңме ни, табиптар был хаҡта иҫкәртмәнеме ни?" тип һорайым. Өндәшмәй.

**▶ Ҡатын-ҡыҙҙа әсәлек тойғоһо ла бар бит әле, аборт яһатырға килгән осраҡта ла унда икеләнеү тойғоһо булалыр?**

● Йә карьераһын, йә матди етешһеҙлеген, йә балаһын яңғыҙы үҫтерә алмауын уйлап, ҡәтғи ҡарарға килгән ҡатынды дүндереү ауыр. Шулай ҙа тәүге тапҡыр ауырға ҡалған бер нисә ҡыҙҙың фекерен үҙгәртә алдыҡ. Әлеге лә баяғы, аборттан һуң булырға мөмкин хәүефле эҙемтәләр тураһында ишетеп, ҡурҡтылар.

● Мәскәү сексопатология үҙәге етәксеһе, профессор Ростислав Беледа әйтеүенсә, был операцияларға, конвейерҙағы кеүек йыш эшләнеү сәбәпле, гел генә етди ҡарамауҙары ла ихтимал.

● Аборт - ул операция. Сәс киҫтереп сығыу түгел. Абортты беҙ күҙ менән күрмәйенсә, бары ҡул менән тойоп эшләйбеҙ. Унда төрлө ауырлыҡтар, төрлө өҙләгәүҙәр килеп сығыуы ихтимал. Махсус инструмент ярҙамында аналыҡтың бала ярала торған функциональ ҡатламы ҡырып таҙартыла. Ә икенсеһе - төп ҡатлам. Улар араһындағы сик шул тиклем йоҡа, операция мәлендә уның имгәнеүе һәм башҡаса бер ҡасан да ла аталана алмауы мөмкин.

**▶ Ҡайһы бер шәхси поликлиникалар аборт яһатыуҙы хәҙер аҡса эшләү алымына әйләндерҙе. Аборт эшләүҙең төрҙәре менән бергә хаҡтары ла үҙгәрә. Ҡиммәт хаҡҡа эшләтелгән аборт арзанынан нимәһе менән айырыла? Гарантия күпме аҡса түләүгә ҡарап бирелмәйҙер бит?**

● Ҡиммәтле аборт - ул йөклөлөктө медикаментоз, йәғни дарыуҙар ярҙамында өҙөү. Ул балаға уҙыуҙың тәүге көндәрендә эшләнә. Ләкин был алым да яҡшы түгел. Дарыуҙарҙан һуң оҙаҡ ваҡытҡа ҡанһырау булырға, әммә ауыры төшмәй ҡалырға мөмкин. Яралғының ҡалдыҡтарын барыбер операция менән алырға тура килә. Шулай уҡ күрем циклы, бауыр эшмәкәрлеге һәм башҡа процестар боҙола. Коммерция йүнәлешендә эшләүсе клиникалар өсөн, әлбиттә, ул күп килем килтерә.

**▶ Рәсәйҙә абортар бик күп эшләнә. Швецияла, мәҫәлән, енси тормош сағыштырмаса иртәрәк башлана, ә абортар юҡ кимәлендә, сөнки ул закон менән тыйылған.**

● Төп проблема - үсмерҙәребеҙҙең енси наҙанлығы. Беҙҙең дәүләттә енси тәрбиә мәҙәниәте бөтөнләй юҡ тиерлек. Көнбайыш йәштәре был йәһәттән мәғлүмәтле. Ауырға ҡалыу планлы рәүештә, уйлап эшләнергә тейеш. Енси тәрбиә буйынса уҡытыусылар түгел, махсус белгестәр шөғөлләнергә тейеш. Мәктәптәрҙә санитар-ағартыу эштәре ойоштороорға кәрәк. Секс тураһында аңлатыу, баланы ололар тормошона әҙерләү бик мөһим. Профессиональ әҙерлеге булмаған үсмер ниндәйҙер проблемаға юлыҡҡас, өлкәндәрҙән һорарға уңайһыҙлана һәм үҙе кеүек үк бер ни белмәгән әхирәте менән кәңәшләшә.

Хәҙер бит төрлө һаҡланыу саралары, дарыуҙар, гормональ контрацептивтар, презервативтар бар. Улар менән дөрөҫ ҡулланыу абортҡа юл ҡуймаясаҡ.

Рәсәйҙә абортты тыйыу кире һөҙөмтәләр бирәсәк. Ауырын төшөртөргә теләгән ҡатын теләһә ҡайһы алымды ҡулланасаҡ - криминаль аборт яһатасаҡ. Ун ике, егерме ике аҙнанан һуң тыйылған ауырҙы төшөрөп, ҡайһы бер әбейҙәр әле лә быҫраҡ аҡса эшләп ята. Былар өсөн айырым закондар ҡаралған.

Ислам тәғлимәте буйынса, аборт харам, иң ҙур гонаһтарҙың береһе һанала. Кешенең ҡарындағы үҫеше - Аллаһының иң мөһим билдәләренең береһе. Йөклөлөктөң 120 көнөндә яралғыға йән керә.

**Светлана НАСЫРОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ошо һөйләшеүҙән һуң Эльвираның фекерен үҙгәртә алдыҡ беҙ. Йөрәк аҫтында йән алған тәүге сабыйы, был донъяға тыуғаны өсөн һөйөнөсөнән ҡысҡырып илап ебәргәндә, үҙе тупылдап торған бәпесен тәүге тапҡыр рәхәтләнеп күкрәгенә ҡыҫҡанда, әсәлек бәхетенән иҫергән әхирәтебеҙ, бәлки, беҙҙең хаҡта иҫенә лә төшөрмәҫ. Үпкәләмәҫбеҙ һәм аңларбыҙ - уның янында беҙҙән дә ҡәҙерлерәк, беҙҙән дә яҡыныраҡ шатлығы булыр.**

✓ *"Бала йоҡлағанды күҙәткәнегеҙ бармы? Иғтибар менән ҡарағыҙ әле: йоҡо аралаш йылмайғанда ул шундай матур. Унан әсә һөтө еҫе килә..."*



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# ЙӨҘ КАРТАЯ ИНДЕ...

## күңелде ҡартайтма

**Һеҙгә нисә йәш? Был һорауға, әлбиттә, икеләнмәйенсә яуап бирерһегеҙ, сөнки тыуған көнөгөҙҙө яҡшы беләһегеҙ. Ләкин ашыҡмай тороғоҙ, кешенең йәшен бит был донъяла йәшәгән йылдар иҫәбе генә билдәләмәй.**

Психологтар, мәҫәлән, кешенең өс төрлө йәше була, тип иҫәпләй: хронологик, биологик һәм психологик. Хронологик йәште тыуыу тураһында таныҡлыҡҡа, йәғни йәшәлгән йылдар иҫәбенә ҡарап билдәләп була. Биологик йәште табибтар тән һаулығына ҡарап әйтә ала. Беҙ үҙебеҙ ҙә ҡай берәүҙәргә "Оло булһа ла, һаулығы йәштәрҙеке кеүек", тип әйтәбеҙ түгелме? Тест ярҙамында кешенең психологик йәшен билдәләп була. Тесһыҙ ҙа һеҙ уны күңелегеҙ менән тояһығыҙ. Мәҫәлән, һеҙгә илле йәш, ти. Күңелегеҙ бит күпкә йәшерәк. Шулай түгелме? Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ҡай берәүҙәр үҙен йәшенән олораҡ итеп тойоуы ла мөмкин. Ни хәл итәһең, тормош бит: күңел торошон нәҡ тормош үҙгәртә, ә йәшәлгән йылдар иҫәбе түгел. Дөрөҫөрәге, тормош үҙгәртмәй, ә ошо фани донъялағы тормошҡа һәм әргә-тирәләге кешеләргә ҡарата мөнәсәбәт үҙгәртә. Бала саҡта, мәҫәлән, тиҙерәк үҫеп, ҙур булғы килә. Ана шул ҙурайғандар аҙаҡ бәләкәй балаларға "Күп аша, ҙур булып үҫерһең", тип ҡабатларға ярата. Шулай бит? Шундай мөнәсәбәтебеҙ менән баланы программалайбыҙ һәм баланың, әлбиттә, тиҙерәк ҙурайғыһы килә. Артабан ул, үсмер ҡорона етеп, тормоштоң башҡа ҡыҙыҡлы яҡтарын тиҙерәк татығыһы килә башлай. Тормош шулай дауам итә.

Кеше үҙ ғүмеренең үҙгәрешен, әлбиттә, еңел кисермәй, төрлө йәштәге кризистар аша үтә - ҡасандыр тиҙерәк ҙурайырға теләгән бала, олоғая килә, бала сағын һағынып иҫкә ала башлай... Владимир Лермонтовтың "Дельфания" китабындағы бер өҙөк хәтергә нык уйылып ҡалған. Ҡыҫҡаса ул ошолайыраҡ: "Бала йоҡлағанды күҙәткәнегеҙ бармы? Иғтибар менән ҡарағыҙ әле: йоҡо аралаш йылмайғанда ул шундай матур. Унан әсә һөтө еҫе килә... Бына шул уҡ бала 40-45 йылдан һуң йоҡлап ята. Бәй, ул шул хәтлем үҙгәргән, йөҙө йыйырсыҡтар менән ҡапланған. Хәҙер ул йоҡо аралаш йылмаймай... Ул бит ауырый. Был ауырыуҙың исеме - ҡартайыу. Ҡартайыу эпидемияһы бөтөн Ер шары буйлап таралған".

Ҡурҡыныс, эйеме? Ләкин ҡурҡырға ярамайҙыр ул. Ана бит, ҡурҡҡандар йәшәрергә теләп, күпме стресс кисерә. Тормошто, кешеләр менән мөнәсәбәтте нисек бар, шулай ҡабул итергә, кисерергә, тойорға кәрәктер ул. Минеңсә, шулай ҡулайыраҡ. Һәр хәлдә, мөхиткә адекват ҡараште булыу аң даирәһен киңәйтә, ә ҡурҡып сәбәләнеүҙәр уны сикләй, ғүмерҙе ҡыҫҡарта.

Ошо темаға ҡағылышлы бер кинәйә һөйләйем әле, һығымтаһын үҙегеҙ яһағыҙ.



### МИН ҺАМАН ДА КӨСЛӨ

Өс бабай йәш саҡтың матурлығы, ҡартлыҡтың шатлыҡ түгеллеге тураһында һөйләшеп ултырған. "Мине аяҡтарым тыңламай башланы, - тип уфтана икән берәһе. - Эх, йәш саҡтарҙағы кеүек әләгеп-йығылып йүгереп йөрө икән ул. Бөгөн аяҡтарымды көскә-көскә һөйрәп йөрөйөм". "Дөрөҫ әйтәһең, ҡорҙаш, - ти икенсеһе. - Минең дә көсөм көндән-көн тамсылап юҡҡа сыға бара. Ваҡыт тирмәнендә беҙ ҙә үҙгәрҙек, замана ла үҙгәрҙе".

Был икеүҙән артыҡ бер ни яғы менән дә айырылмаған өсөнсө бабай уларҙың һөйләшкәнен тыныс ҡына тыңлап ултырған да: "Мин һеҙҙең нимә тураһында һөйләшкәнегеҙҙе аңламайым, - ти икән. - Мәҫәлән, мин бынан ҡырҡ йыл элек ни тиклем көслө булһам, бөгөн дә шулаймын". Тәүге икәү һаҡалдарын һелкә-һелкә кеткелдәп көлгән. "Ниңә көләһегеҙ, ысынлап та шулай, - тип ныҡышҡан "көслө" бабай. - Быға мин кисә тағы бер тапҡыр инандым. Минең өйҙәге имән шкафты күргәнегеҙ бар бит. Бынан ҡырҡ йыл элек мин шуны күтәреп, икенсе урынға күсереп ултыртырға уйлағайным, ләкин көсөм етмәгәйне. Кисә шуны тағы күтәреп ҡараным. Нимә тип уйлайһығыҙ? Эйе, тағы ла көсөм етмәне. Тимәк, бынан ҡырҡ йыл элек мин ни тиклем көслө булһам, бөгөн дә шулай көслөмөн".

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Шунан, йәмәғәт, һеҙгә нисә йәш? Әйттем бит, йәшегеҙҙе билдәләп, үҙегеҙҙе сикләмәй тороғоҙ - тормош дауам итә.**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# Донъяла...

## тәртип булһын, тиһәң

**Тәлмәрйендә ҡайнар һыулы кәстрүлгә төшөрһәң, нимә буламы? Әлбиттә, ул ҡотолоу яғын ҡарап, шунда уҡ ырғып сығасаҡ. Әгәр уны һалҡын һыулы кәстрүлгә төшөрөп, һыуҙы йылыта башлаһаң? Тәлмәрйен тәүҙә йылынып ята, ләкин һыу ҡайнай башлаһа, ул барыбер бешәсәк...**

Тормошта ла бөтөн нәмә сигенә еткәнсе әкренләп йыйыла. Бурыстар менән дә шулай. Мәҫәлән, иртән йоҡонан уянғас, кемгәлер 68 мең евро бурысың иҫеңә төшөү менән күңелде хәүеф биләй. Әгәр бөгөн кемгәлер 9 һум, иртәгә бәғзе берәүгә 14 һум бирәсәк булһа, түләрмен әле, тип уға етди ҡарамайбыҙ. Ә бит иртәгәгә ҡалдырған һайын бурыс артасаҡ һәм бер көн килеп тыныс күңел менән йәшәү мөмкинлеге бирмәйәсәк. Иртән йоҡонан уянғас, ауырлыҡтарыңды үлсәп ҡарап, йылап һимерә барыуға борсолабыҙ, әммә ай һайын 1 килоға артыу - беҙҙең өсөн оло фажиғәгә әүерелә. Былар барыһы ла беҙҙең ҡай бер нәмәләрҙе ваҡ-төйәкҡә һанап, тәүҙә уға әһәмиәт бирмәүҙән килә. Теләһә ҡайһы ваҡ әйбер кешене маҡсатына йә илтә, йә унан алыҫлаштыра. Шуның өсөн кеше үҙ-үҙенә һәр саҡ: "Мин ниндәй йүнәлештән барам әле?",- тигән һорау бирергә тейеш.

Берәүҙәр, бөгөн бер алма йәки шоколад ашау, яҡшы китап уҡыу һәм телевизорҙан йылдар буйына ла бөтмәгән сериалдың сираттағы серияһын ҡарау, 100 һум аҡсаны тотонмай йыйып ҡуйыу йәки уны туҙҙырыу араһында ниндәй айырма бар, тиер. Айырма ҙур икән шул. Мәҫәлән, яңынан ун йылдан шоколад ашап, диванда сериалдар ҡарап ятыу - һимереүгә, тормошҡа өҫтән-мөҫтән ҡарау һәм аҡса туҙҙырыу ярлылыҡҡа килтерә. Ә еләк-емеш - сәләмәтлеккә, яҡшы китап - ғилемгә, аҡсаны тәләфләмәү мул тормошҡа алып килә. Әлбиттә,тормош көртәләрен еңеп сығыу өсөн гел генә аҡыллы ҡарарға килеү мөмкин дә түгел. Ләкин тормош беҙ хәл иткән нәмәләрҙең барыһын да үҙенсә үҙгәртеүсән. Бындай осраҡта кеше өсөн битарафлыҡтан да насар кәңәшсе юҡ. Һәр ваҡыт яңынан тәүәккәлләп ҡарау мөһим.

Бер атай балаһы баҡсала эшләргә ирек бирмәгәс, донъя картаһын ваҡ ҡына киҫәктәргә йырта ла: "Ошо картаны яңынан йый",- тип, улына эш ҡушып сығып китә. "Картаны көнө буйына ла дөрөҫ итеп сағылдыра алмаҫ, иркенләп эшләп алайым", тип уйлай атай кеше. Ләкин ярты сәғәт тә үтмәҫтән, улының донъя картаһын дөп-дөрөҫ итеп йыйыуын күреп, телһеҙ ҡала. Атаһы һаман ышанмай торғас, улы: "Картаның икенсе яғында бер кешенең һүрәте төшөрөлгәйне. Ваҡ киҫәктәргә йыртҡыланған картаға ҡарағанда, уны йыйыу ауыр булмағас, мин, кешенең йөҙөн дөрөҫ итеп йәбештерһәм, донъя ла дөрөҫ буласаҡ, тип уйланым",- тигән...

Был беҙгә ниндәй ҙә булһа уңыш ҡаҙаныр өсөн һәр саҡ уйланырға, өйрәнергә, аҡылды үҫтерергә, теләһә ҡайһы эштә камиллашырға кәрәклеге тураһында һөйләй. Ни өсөн тигәндә, беҙ киләсәгебеҙҙе билдәләүсе үҙебеҙ ҡабул иткән ҡарарҙар йыйылмаһынан торабыҙ. Әгәр үҙебеҙҙе дөрөҫ йыйғанбыҙ икән - донъяла ла тәртип буласаҡ.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# "БЕҘҘЕҢ КИРБЕС

## Өфөнөң һәр бинаһында тиерлек бар"

**"Башҡортостан кирбесе" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтендә ошолай тип әйтеүҙәре һис тә арттырыу түгел. Республикабыҙ баш ҡалаһындағы биналарҙың һикһәндән ашыу проценты ошо компания заводтарында сығарылған кирбестәрҙән төҙөлгән. Бөгөн уның ҡарамағында дүрт завод эшләй. Уларҙың береһе силикат кирбесе етештереү йүнәлешендә махсуслашҡан.**

- Беҙҙең компания етештереү үҙенсәлектәрендә бер ниндәй ҡатмарлыҡ та, хәйлә лә юҡ, тигән фекер йөрөй. Ҡом менән эзбизде бутап, шуны тығыҙлаһаң, быны һиңә кирбес, имеш, тиҙәр, - тип йылмая предприятиеның баш инженеры Александр Кольцов. - Әлбиттә, был улай түгел. Етештереү үҙенсәлеге ярайһы уҡ ҡатмарлы, бында технологиянан ситкә сыҡмау фарыз.



Иң юғары сифатлы кирбестәр "Боймер һәм Боймер" немец фирмаһында әҙерләнә. Һәр заводта кирбестең ныҡлығын, һығылмалығын, һыуыҡҡа сыҙамлығын тикшереүсе лаборатория бар.

Бөгөн айына ике миллиондан ашыу кирбес сығарылһа, тиҙҙән етештереүгә йүнәлтеләсәк инвестициялар ярҙамында уның һаны өс миллионға тиклем артыуы көтөлә.

Силикат кирбесе нимәһе менән яҡшы һуң? Ныҡлығы яғынан ул керамик кирбестән бер ҙә кәм түгел, киреһенсә, унан һәйбәтерәк тип иҫәпләнә. Йылылыҡ үткәреү йәһәтенән дә улар бер төрлө тиергә була. Силикат кирбесе тышҡы яҡтан матурыраҡ та.

Ә инде гигиеник сертификат алыу "Башҡортостан кирбесе" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте продукцияһының экологик яҡтан таҙа булыуын дәлилләй. Уны етештереүҙә урындағы сеймал ҡулланыла, ә дүрт заводтың да ҡала ситендә урынлашыуы уның тағы бер ыңғай яғын - клиенттарҙы күберәк йәлеп итеүен күрһәтә.

"Башҡортостан кирбесе" Өфөнөң төҙөлеш материалдары баҙарында керамик һәм силикат кирбесе етештереү һәм һатыу буйынса иң эре предприятиеларҙан һанала. Унда бөгөн 550 кеше эшләй.

Предприятие "Рәсәй граждандарына осһоҙ һәм уңайлы торлаҡ" өҫтөнлөклө милли проектында ҡатнаша. Быйыл ул барлыҡ юбилей объекттары төҙөлешенә кирбес менән тәьмин итә. Компания продукцияһын шәхси төҙөүселәр ҙә күпләп һатып ала. Кирбес башҡа төҙөлеш материалдарынан шул яғы менән айырыла: ул утҡа сыҙамлы булғанлыҡтан, йылыны яҡшы һаҡлай, бинаны дым менән тейешенсә тәьмин итә.

"Башҡортостан кирбесе"нең өҫтөнлөктәре:

- цехтарҙың ҡала ситендә генә урынлашыуы уны ташыуға сығым күп талап итмәй;
- бөтә төр кирбестәр ҙә графикка ярашлы төҙөлеш объектына килтереп ҡуйыла (ваҡыты һәм көндәр иҫәбе күҙ уңында тотола);
- юғары сифат;
- компанияның төп ҡағиҙәһе: "Беҙ буш вәғәҙәләр бирмәйбеҙ" һәм "Сифат - беҙең төп принцип";
- клиенттарҙың проблемаһын компания үҙ иңенә ала: ваҡытында түләү ҙә етә - төҙөлеш майҙанына килтереп ҡуйыуҙы үҙе хәл итә.

**...Әйткәндәй, былтыр йәй силикат кирбесен һатып алыу буйынса клиенттар сират торҙо.**

**Ирина КАРПЕНКО.**

✓ *Улар училищебыҙҙағы уҡытыусылар коллективының иң яратҡан студияһы ла булды. Сөнки башҡорттарға хас ихласлыҡ, күңел йылылығы, әхлаҡлек, тәртип хәҙер күптәрҙә юҡ.*



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# Щепкинсылар ҡайтты!

## Бәхетле билет әләктергәйне улар бынан биш йыл элек

**Владимир СЕЛЕЗНЕВ, профессор, М.С. Щепкин исемендәге училищеның проректоры:**

- Беҙҙең училищены асыу тураһындағы 1809 йылдың 28 декабрендәге Александр I батша ҡабул иткән указда "...Мәскәү, Петербург һәм Париж сәхнәләре өсөн театр актерҙары әҙерләүгә тәғәйенләнгән..." тигән юлдар бар. Әлбиттә, бөгөн беҙ Париж өсөн актерҙар әҙерләмәйбеҙ, әммә Рәсәй халыҡтарына йөҙ борҙоҡ. 1950 йылдан алып беҙ училищебыҙҙа 50-нән артыҡ милли студия ойошторол, республикалар өсөн артистар уҡытып сығарҙыҡ. Быны был юлы беҙҙең училищела уҡыу бәхете башҡорттарға тейҙе.

Сит илдәр, мәҫәлән, Германия, ҙур аҡсалар тәҡдим итеп, беҙҙә студия астырыуҙы һорай ул, ләкин беҙ тәү сиратта илебеҙҙәге мәҙәниәтте һаҡлап ҡалырға һәм артабан юғары баҫҡыстарға үрләтергә ынтылабыҙ.

Беҙҙә бөгөн халыҡтар араһында дуҫлыҡ, диалог хаҡында күп һөйләйҙәр. Шул уҡ мәлдә реаль эш башҡарыусылар бик аҙ. Беҙ иһә ҡоро һүҙҙән алыҫбыҙ, эшебеҙ менән Рәсәй халыҡтарының дуҫлыҡ монументына үҙ ташыбыҙҙы һалабыҙ. Сөнки бар нәмә мәҙәниәттән башлана, беҙҙең осраҡта - сәхнәнән. Башҡорт балаларына Мәскәү мөхитенә эләгеп, осталыҡ мәктәбендә сынығыу алыу ғүмергә етерлек булды. Уларҙың тормошта бер генә тапҡыр була торған форсатты аңлап: "Беҙгә бәхетле билет тотторғанығыҙ өсөн рәхмәт һеҙгә!" - тиеүе үк күпте һөйләй.

Минән күптәр, был егет-ҡыҙҙар араһынан кемдәрҙе айырып әйтер инегеҙ, тип һорай. Минең өсөн улар бөтәһе лә бер тигеҙ, сағыу. Әммә был - улар үҙ-ара тиң, тигән һүҙ түгел. Улар ҙа һәләттәре, эске донъялары, мөмкинлектәре менән бер-береһенән айырыла. Биш йыл уҡыту осоронда беҙ уларҙан профессиональ актер үҫтерергә тырыштыҡ. Улар туған сәхнәһенә әйләнеп ҡайтҡас, үҙҙәре лә бында яңы мөхит булдырырға тейеш. Бурыс шундай.

Башҡорт йәштәре беҙҙә уҡыған саҡта әҙәбиәт менән дә тығыҙ бәйләнештә булды. Күптәрендә шағирлыҡ, яҙыусылыҡ ҡеүәһе асыҡланды. Бигерәк тә классик драма әҫәрҙәрен тәржемә итеү оҫталары хасил булды.

Башҡортостанға килгән һайын мин һоҡланып та, көнләшеп тә китәм. Сөнки һеҙҙең республикалы театрҙарға булған шундай матур иғтибар, мөнәсәбәт Рәсәйҙең күп төбәктәре өсөн яҡты хыял ғына.

**Изольда ХВАЦКАЯ, училище уҡытыусыһы, доцент:**

- Ҡайһы бер осраҡта ниҙер әйтеүгә ҡарағанда, шымып ултырып отошлораҡ. Әммә "үҙ балаларыбыҙ" - башҡорт ҡыҙҙарыегеттәре хаҡында йылы һүҙ әйтмәү дөрөҫ булмаҫ. Биш йыл уҡыу осоронда улар барыһы ла беҙҙең гәзиз балаларыбыҙға әйләнде. Улар училищебыҙҙағы уҡытыусылар коллективының иң яратҡан студияһы ла булды. Сөнки башҡорттарға хас ихласлыҡ, күңел йылылығы, әхлаҡлек, тәртип хәҙер күптәрҙә юҡ. Бөгөн иһә улар беҙҙе ташлап китә... Ҡайтанан башҡорт мөхитенә ҡайта.

Эйе, уларҙың күптәренә ҡыйын булыр. Әммә улар актер һөнәре ауыр икәнлеген бөгөндән үк аңлай. Күп осраҡта "рауза сәскәһенә күмелеп түгел, ә ҡара икмәк менән тукланып" йәшәргә лә тура киләсәк. Актер һөнәре ғүмер буйы камиллашыу талап итәсәк. Мин уларҙың бөтәһенә лә бәхет, уңыш теләйем. Уларға үҙемдең тормош девизымды аманат итеп ҡалдырам: "Ихтыяр һәм тыныслыҡ!".

**Нелли ОНЧУРОВА, театр белгесе, тәнҡитсе:**

- Былтыр ике йылға бер тапҡыр уҙғарылған "Подиум" тигән театр мәктәптәренең донъя фестивален анализларға насип булды. Уныһы тапҡыр уҙғарылған "Подиум" рус театры барлыҡҡа килеүенең 250 йыллығына арналғайны. "Подиум"да Германия, Ҡаҙағстан, АҠШ, Чехия һәм Рәсәйҙең тиҫтәнән артыҡ ҡалаларынан театр мәктәптәре көс һынашты. Ҡатнашыусылар хәҙергә заман һәм классик әҫәрҙәрҙәге сәхнәгә сығарҙы. Минеңсә, Щепкин училищеһының башҡорт студияһы студенттары уйнаған "Дети Ванюшина" спектакле "Подиум"дың иң яҡшы әҫәре булды. Купец Ванюшиндың тәү ҡарамаҡҡа нык, емерелмәҫ ғаиләһенең йәшәйеше аҡрынлап күҙ алдында ҡойолоп төшә. Актерҙар режиссер ярҙамында тап ошо "емереклекте" уңышлы әләктергән, һөҙөмтәлә тамашасы спектаклдең артабан ниндәй көсәргәнеш менән тамамланасағын һиҙә. Алдаҡ менән ҡурҡыу ғаилә хужаларын шул тиклем аҙҙыра, хатта атайҙың һаран яғымлылығы ла гимназист-ҡыҙҙарҙы тыя алмай. Ерекә еткереп ҡуйылған пьесаны тамашасы ҙур кинәнес, иғтибар менән аҙағына тиклем ҡарай. Спектаклдең башҡорт телендә барыуы ғына ла күп нәмә хаҡында һөйләй.

**"Подиум"да күрһәтелгән 32 спектакль театр сәнғәтендә әхлаҡтың оло урынға тәгәрәүен күрһәтә, әммә башҡорт актерҙары ҡуйған сығыш өмөтлө картина булдырҙы. Беҙҙең кешелеклегебеҙҙе юҡҡа сығарырға ниәтләп, Көнбайыштан көслө һөжүм менән килгән антимәҙәниәт йоғонтоһо көсәйеүгә ҡарамаҫтан, училищеның үҙ студенттарында изге йолаларҙы тәрбиәләргә тырышыуы хуплауға лайыҡ. Тимәк, театр-кафедраның нигеҙе бар, һуңғыһы киләсәк бар, тигәнде лә аңлата. Һеҙҙең театрға бына шундай көслө мәктәптең иң яҡшы традициялары менән ҡоралланған йәштәр ҡайта.**

**Марат АБДУЛЛИН яҙып алды.**



## ✓ ШУЛАЙ ИТЕП...

**Кадрҙар барыһын да хәл итә. Беҙгә был өлкәлә күп эштәр эшләйһе бар. Якуттар, мәҫәлән, кадрҙар менән эшләүсе махсус департамент эшләй. Департаменттың программаһына ярашлы, һәр йыл 40 процент якут ҡыҙҙары һәм егеттәре - дәүләт иҫәбенә һәм 60 проценты коммерция нигеҙендә уҡыуға индерелә. Коммерция бүлектәрендә уҡытыу өсөн дә хөкүмәт үҙе түләй. Һөҙөмтәлә был департамент 1998 йылдан алып 6 меңдән ашыу якутты Гарвард, Оксфорд, МГУ кеүек донъяның иң алдынғы юғары уҡыу йорттарына уҡырға индергән. Мәскәүҙә генә бөгөн Саха-Якутстан хөкүмәте иҫәбенә 4 мең тирәһе якут милләтле студент белем ала. Әйткәндәй, Щепкин училищеһында әлеге мәлдә якут йәштәре бишенсе тапҡыр ойошторолған милли студияла белем ала. Былар иһә үҙ һөҙөмтәләрен дә бирә. Мәҫәлән, былтыр Рәсәйҙең иң абруйлы театр премияһы "Алтын битлек"те ҡасандыр тап ошо уҡыу йортон тамамлаусы якут артистары алды.**

*АҠЫЛ – ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Изгелек эшлә лә...

## дошманыңдан үс ал

Күҙ йәштәре менән сыкмаған хәсрәт эске ағзаларыңды "иларға" мәжбүр итә.
**(К. Быков, билдәле психиатр).**

Аҡыл һатыу көсһеҙҙәрҙең үҙҙәрен яҡлау ҡоралы.
**(Абу Шакур Балхи, афған шағиры).**

Аңғыҙлыҡ нимә, беләһегеҙме? Ул - телефоның була тороп, будильник сәғәт шылтырауы .
**(Клара Новикова).**

Кем артыҡ нык ышандырырға тырыша, ул бөтөнләй ышандырмай.
**(Никола Шамфор, француз яҙыусыһы).**

Беҙҙең тәрбиә емештәре беҙҙең үк башҡа өйөлә.
**(Тамара Клейман).**

Бирәүҙәр тамырына тиклем ҡаҙынғансы, башҡалар емешен әләктерә.
**(Бер Теодор).**

Мин, әлбиттә, барыһы ла икенсе төрлө булһа, барыһы ла яҡшырасаҡ икәнен раҫлай алмайым. Ләкин мин шуны раҫлай алам: барыһы ла яҡшырырға тейеш булһа, барыһы ла икенсе төрлө булырға тейеш.
**(Георг Лихтенберг).**

Дошманыңдан нисек үс алырға? Уға мөмкин тиклем күберәк изгелек эшләргә!
**(Эпиктет).**

Кем бер ваҡытта ла бәхетһеҙ булмаған - ул бәхетһеҙ.
**(Боронғо бер аҡыл).**

Кем миллиондар эҙләй, ул уны бик һирәк осраҡта ғына табырға мөмкин. Унын ҡарауы, миллиондар эҙләмәгән кеше уны бер ваҡытта ла тапмай.
**(О. Бальзак).**

Шәп йүгереүҙә эш тормай, ә алдараҡ йүгереп килеүҙә бөтә хикмәт.
**(Ф. Рабле).**

Халыҡты тәртипкә күндереп була, ә бына белем алыуға күндереүе ауыр.
**(Конфуций).**

Ниммәләлер уңыш ҡаҙаныу өсөн бер аҙ аҡылһыҙыраҡ булыу фарыҙ.
**(Уильям Шекспир).**

Бөйөк кешеләр ерҙәге бөйөк хәсрәтте тойорға тейеш.
**(Марк Твен).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: " Хаким Акбар ергә оҙон бер һыҙыҡ һыҙған да, үҙенең вәзире Бирбал алдына сиселмәҫ йомаҡ ҡойған: һыҙыҡҡа ҡағылмайынса, уны ҡыҫҡарт йә юҡҡа сығар. Бер һүҙ ҙә әйтмәҫтән, Бирбал әлеге һыҙыҡ эргәһенә оҙонораҡ тағы бер һыҙыҡ һыҙып ҡуйған. Шулай Акбар һыҙған һыҙыҡ вәзире һыҙған һыҙыҡ алдында ҡыҫҡараҡ булып ҡалған".**


**«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:**
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәррииәт:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТКУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **253-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәрендә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **253-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү танылкһы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6004
Заказ 1822